ISSN 0869-5008

# АМАНАТ

2010
Июнь



“АМАНАТ”ҠА ЯҘЫЛЫП, “ЯҘЫЛ ДА, БҮЛӘК ОТ!” УЙЫНЫНДА ҠАТНАШЫП, АМУР ВЕЛОСИПЕДЛЫ БУЛДЫ. УЙЫН СЕНТЯБРҘӘ ЯҢЫНАН БАШЛАНАСАҠ.







Йәйҙәр беҙгә серен аса
Һәр таңынан, гөлөнән, –
Йыр йыябыҙ косаҡ-косаҡ
Беҙ бала саҡ иленән.

Икһеҙ-сикһеҙ ҙур донъяны
Яулайһылар бар алда,
Зәңгәр күктәй иркен шуға,
Алсаҡ беҙҙең хыялдар:

Тыныс илдә, ирек тойоп,
Уйнайһы һәм үҫәһе,
Сабыйлыктан балалыкка,
Үҫмерлеккә күсәһе;

Шул юлдарҙа бик-бик күпте
Аңлайһы һәм тояһы,
Илебеҙгә иң кәрәкле
Ҙур шәхестәр булаһы –

Барыһы ла алда беҙҙең.
Шуға шат беҙҙең йөҙҙәр.
Балалыктай, күңелдәрҙә
Мәңге йәшәһен йәйҙәр!

## Өсөнсө ҡоролтай

**9-12 июндә Өфөлә Бөтөн донъя башҡорттарының өсөнсө ҡоротайы үтте. Республиканың һәр район-ҡалаһынан, барлыҡ Рәсәй төбәктәренән, бар донъянан йыйылған башҡорт халҡы вәкилдәре республиканың, милләтебеҙҙең бөгөнгө хәле, артабанғы үҫеш юлдары буйынса фекер алышты, киләсәктә хәл ителәсәк мәсьәләләрҙе билдәләне, программалар ҡабул итте.**

Ошо уҡ ҡоролтай сиктәрендә башҡорт йәштәре лә үҙҙәренең беренсе ҡоролтайын үткәрҙе. Йәмғиәттең иң әүҙем өлөшө булараҡ, йәштәр киләсәктә үҙҙәре йәшәйәсәк йәмғиәттең бөгөнгө проблемаларын, үҙҙәре алдынғы вәкилдәре булып сығыш яһаясаҡ башҡорт халҡының киләсәгенә ҡағылышлы проблемаларҙы тикшереүҙә ҙур әүҙемлек күрһәтте.

Ҡоролтай делегаттары өсөн Ишембай районының Торатау тауы янында "Ырыуҙар ташы" мемориаль комплексына нигеҙ һалыу һәм "Салауат йыйыны" фольклор байрамы үткәрелде.

Беҙҙең журнал тышында

## "Аманат"тың сәпите – Учалыла!



Яҙыл ДА, БҮЛӘК ОТ!

"Аманат" журналының "Яҙыл да, бүләк от!" конкурсында еңеп, велосипед яулаған Амур Моратшин – Учалы ҡалаһынан. Ул 12-се Башҡорт гимназияһының 6-сы синыфын тамамланы. 900 бала уҡыған ҙур лицейҙың ишек алдында, үҙенә күҙҙәре ҡыҙып ҡараған башҡа малайҙарҙы эстән генә көрһөндөрөп, ул бүләк велосипедта тантаналы түңәрәк яһап әйләнде. Нишләйһең, башҡалар уның һымаҡ "Аманат" журналын яратып уҡымай, алдырһа ла, конкурста ҡатнашыу тураһында уйлап та ҡарамаған шул. Ә Амур беҙҙең төрлө конкурстарҙа гел ҡатнашып тора икән. "Минең исем-фамилиям һеҙҙең журналығыҙҙа бер нисә тапҡыр күренде инде", – тип ул үҙендә һаҡланған бер нисә журнал һанын да күрһәтте беҙҙә. Артабан да "Аманат" менән дуҫ булып ҡалырға вәғәҙә бирҙе.

**Илһам ӘХМӘҘУЛЛИН фотоһы.**

## "Ирәндек моңдары – 2010"



Сибай ҡалаһында үткән "Ирәндек моңдары – 2010" төбәк-ара башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар конкурсында балалар араһында Нуриман районының Яңы Күл ауылынан Рушан Хәлилов еңеү яуланы. Был конкурста төрлө райондарҙан һәм сит өлкәләрҙән 58 бала ҡатнашты.

## Каникулығыҙ файҙалы үтһен!



Республикала бөтәһе 97 стационар балалар һауыҡтырыу лагеры, 20 шифахана эшләй. 17 шифахана-профилакторийҙа балалар өсөн сменалар ойошторола.

Быға тиклем 97 лагерҙың 84-е йәй айҙарында ғына балаларҙы ҡабул итә ине. Улар йәйлап йыл әйләнәһенә эшләүсе учреждение статусын алырға тейеш. Йәйгеһен сменалар – 18-21, ә көҙгө, ҡышҡы, яҙғы каникулдарҙа 7 көн буласаҡ. Мәктәптәр базаһында ойоштороласаҡ көндөҙгө ял үҙәктәренә лә балалар 21 көн йөрөйәсәк. Быйылдан көндөҙгө лагерҙарҙа бөтә балалар ҙа, шул иҫәптән ата-әсәләре эшләмәгәндәр ҙә, ял итеү хоҡуғына эйә.

Ғөмүмән, быйыл йәй Башҡортостанда 400 мең уҡыусы шулай ял итәсәк, шулай уҡ 27 мең үҫмер ваҡытлыса эш менән тәьмин ителәсәк.

## Ҡайын

Тәҙрәмдең алдында,
Һап-һары ҡайын тора.
Ниңә һарғайҙы икән, – тип
Бар ҙа үҙенән һора!
Шул ҡайындың ҡырында –
Ҡыҙарып бешкән миләш.
Эй, ҡайынҡай, ҡайғырма!
Янында бит бар серҙәш...
Был урмандың матурлығын
Ҡарап-ҡарап хәл бөтә.
Был донъянан бар балалар
Тик яҡшылыҡтар көтә.

**Гөлгөнә БАҺАУЕТДИНОВА,**
**Өфө ҡалаһының**
**128-се мәктәбе уҡыусыһы.**

## Ағайыма

Иң ҡәҙерлем, иң яҡыным ,
Берҙән-берем минең ағайым.
Һүҙҙәреңә гелән ҡолаҡ һалам,
Әйткәнеңде һәр саҡ тыңлайым.

Ҡыйын саҡта һәр саҡ янымдаһың,
Ҡыҙ булһам да, миңә һин өлгө.
Шаяртыуҙар аша йылуатаһың,
Ҡояш нурлағандай йөҙөмдө.

Һин ағай ҙа һәм иң яҡын дуҫ та,
Һин беләһең бар серҙәремде.
Беҙҙән йыраҡтарҙа булғанда ла,
Һағынам, ағай, кәңәштәреңде.

**Линария ҒӘЛИМОВА.**
**Дәүләкән районының**
**Буранғол ауылы.**

## Китапханала

Китапхананың эсендә
Төрлө-төрлө китап бар.
Ҡыҙыҡһынып йөрөй уға
Мәктәптәге балалар.

Мин дә уға йыш йөрөйөм,
Уҡырға бик яратам.
“Күп уҡыған – уҡып уңған,
Туңған бит уҡымаған”.

Барлыҡ ҡыҙыҡ мәғлүмәтте
Табырһың китаптарҙан.
Әгәр күпте белгең килһә,
Кил һин китапханаға!

**Лилиә ҠАҺАРМАНОВА.**
**Бөрйән районының**
**Байназар урта мәктәбе**
**уҡыусыһы.**



## Картатайым

Күңелемдә шиғыр тыуҙы
Картатайым хаҡында.
Ун һигеҙҙә яуға кергән
Тыуған иле хаҡына.

Ҡаты һуғыш яланында
Дошман менән алышҡан.
Йәнен-тәнен аямайса
Батырҙарса һуғышҡан.

Картатайҙың миҙалдары
Һаҡлана өй түрендә.
Улар беҙгә һөйләй кеүек
Ауыр йылдар турында.

Ул замандар һаман йәшәй
Хәтер булып күңелдә.
Яҡшы уҡып, беҙ йәшәрбеҙ
Тыныс һәм матур илдә.

**Дилә ИСХАҠОВА,**
**Баймаҡ районының**
**Октябрь мәктәбе уҡыты-**
**усыһы.**

## Врач олатайға

**Мирсал Зәйнетдин улына**
**бағышлана**

Ҡышын тышта күп уйнап,
Ауырып киттем бына.
Дауаханаға барҙым
Дауаланып ҡайтырға.

Ә унда бер олатай
Кейгән аҡ ҡалпаҡтарын.
Эй, ҡараны, эй, һораны,
Ҡайһы ерем ауыртҡанын.

Төрлө-төрлө дарыуҙарҙы
Яҙып бирҙе ул миңә.
Ул шәбәйткән күп кешене,
Шәбәйҙем бына мин дә!

Оҙаҡ йәшәгеҙ, ауырымай,
Бәлә-ҡазалар күрмәй.
Йомшаҡ ҡулығыҙ өсөн
Рәхмәт һеҙгә, олатай!

**Әминә БИКБОВА.**
**Ейәнсура районының**
**Абзан ауылы.**

## Мин – бал ҡорто

Мин тыуыу менән бөтә донъяны, бер туған апайҙарымды, ағайҙарымды күрҙем. Бына әсәйем дә уянды. Тышта яҙ. Ҡояш йылмайып тора. Бөтә апайҙарым менән уйнап-көлөп, осоп йөрөп килдек. Беҙ ағаста эленеп торған өйөбөҙгә индек. Унда бөтәһе лә шаулашалар, әллә нимә йыялар. Мин әсәйемдең янына килдем дә:

– Әсәй, нимә йыяһығыҙ ул? – тинем.

– Беҙ, балам, бал ҡорттары, шуға күрә, бал йыябыҙ.

– Ә ни өсөн?

– Балды беҙ кешеләргә файҙа өсөн йыябыҙ.

– Ә балды нисек эшләйһегеҙ?

– Беҙ тышҡа сығып, сәскә һутын йыйып алып, ҡайтып, унан бал эшләйбеҙ.

– Ә кем тағы ла бал ашай?

– Айыу. Ул тиҙ генә беҙҙе таба, ағасҡа менә лә, балды ашай, – тип әсәйем мине үҙе менән алып китте. Ул миңә нисек бал йыйырға өйрәтә башланы. Оҙаҡ ҡына эшләнем мин, ләкин арыманым. Әсәйем дә, башҡа бал ҡорттары ла эшләй ине. Ҡояш инде байый башланы. Әсәйем миңә йылмайып:

– Ярай, балам, бөгөнгә һиңә еткән. Һин әле бик бәләкәйһең, бар, ял итеп ал, – тине.

Мин ял итеп ятҡанда, әллә нимә дап-доп, дап-доп килә башланы. Әсәйем менән сығып ҡараһаҡ, ҙур айыу. Бал ашарға килгән. Ағасҡа менеп, тәпәйе менән балды ала ла башланы. Бал ҡорттары уны сағырға тотондо. Тик айыуҙың йөнө бик оҙон шул, сағып булмай. Ҡайһыларын айыу иҙеп бөттө. Мин дә өйөмдө һаҡлай инем. Айыу миңә табан килә башланы. Шул саҡ нимәлер “шарт” итеп ҡалды. Ҡараһам, айыу ерҙә ята. Эргәһендә кеше бар. Ул беҙҙе йыйып алып, ҡара тоҡсайына һалды. Мин күҙемде асһам, әллә ҡайҙа торам. Әсәйемде күреп ҡалып:

– Әсәй, беҙ ҡайҙа килеп сыҡтыҡ? – тип һораным.

– Беҙ, балам, сәскәле аҡланға килеп сыҡтыҡ. Беҙҙе кешеләр бында бал йыйырға килтергәндәр.

– Ә теге айыу беҙҙең балды ашап өлгөрҙөмө?

– Юҡ, беҙҙе бер һунарсы ҡотҡарҙы. Хәҙер бына беҙ кешегә бал йыясаҡбыҙ, – тине.

Туғандарым менән тағы бал йыя башланыҡ. Бында һәйбәт, сөнки дошмандар ҡамасауламай. Беҙ йәй буйына эшләйбеҙ, ә ҡышын йоҡоға китәбеҙ. Был яңы өй барыбыҙға ла бик оҡшаны.

**Светлана МОСТАФИНА,**
**Учалы районы**
**Абҙаҡ урта мәктәбенең**
**6-сы синыф уҡыусыһы.**

## Бабай, эт һәм бесәй

Борон-борон заманда йәшәгән, ти бер бабай. Уның бер бесәйе булған. Бесәй күп ашап һимереп киткән. Бабай, асыуланып, уны ҡыуып ебәргән. Шунан бабайға бер эт килгән. “Әйҙә, бергәләп йәшәйек!” – тигән ул. Улар бергә йәшәй башлаған.

Бер ваҡыт бабайҙың өйөндә сысҡандар күбәйә башлаған. Бабай бесәйҙе иҫенә төшөрөп, уны эҙләп табып алып ҡайтҡан. Өсәүләп татыу ғына тора башлағандар. Һәр береһе үҙ эшен яҡшы башҡарған. Бесәй өйҙө таҙа тотҡан, ә эт йорт-ҡураны һаҡлаған.

Бесәй һәм эттәрҙе рәнйетергә ярамай, улар беҙгә тоғро хеҙмәт итәләр. Шуға ла уларға ҡарата мәрхәмәтле, рәхимле булайыҡ, дуҫтар.

**Миңзәлә**
**СӘЛИМЙӘНОВА.**
**Баймаҡ районының**
**Ниғәмәт ауылы.**



# Уҡытыусылар мәктәбе

Үҙ эшен яратып, бөтә күңелен һалып башҡарған кеше һәр саҡ ихтирамға лайыҡ. Уҡытыусы кешенең ошо сифаттарға эйә булыуы – бик матур күренеш. Хәйер, уҡытыусы ошондай ғына сифаттарға эйә булырға тейешме һуң? Минеңсә, Кешелектә булған бөтә изге сифаттар ҙа уҡытыусылар күңелендә урын алһа яҡшыраҡ.

Мәсәғүт педагогия колледжында ошондай ҡатмарлы, күп иғтибар талап иткән уҡытыусы һөнәренә уҡыталар. Юғары квалификациялы, үҙ эшен яҡшы белгән уҡытыусылар беҙгә белем бирә. Төплө белем алырға, үҫеңде бөтә яҡтан күрһәтергә бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Спорт секциялары, бейеү-йыр түңәрәктәре эшләп килә. "Ориентир" һәм "Йәйғор" гәзиттәре сығарыла.

Колледж студенттары ваҡытын файҙалы һәм күңелле уҙғарырға тырыша. "Һаулыҡ көнө", "Студентлыҡҡа бағышлау", "Йәле, төркөм" һәм башҡа саралар йыш ҡына үткәрелеп тора. "Фортуна", "Дуҫлыҡ" бейеү төркөмдәре, ҡурайсылар ансамбле – һәр ҡайһыһы колледждың ғорурлығына әйләнгән.

Бында башҡорт теле һәм әҙәбиәте, информатика, инглиз теле, урыҫ теле һәм әҙәбиәте, башланғыс синыфтар уҡытыусыларын һәм тәрбиәселәрҙе әҙерләйҙәр. Әйткәндәй, инглиз теле бүлеге, 1995 йылда ғына асылыуына ҡарамаҫтан, ҙур уңыштарға өлгәшә: был бүлектә белем алыусылар Президент стипендиаты исемен, төрлө конкурстарҙа призлы урындар яулай. Шулай уҡ колледжда йыл да төрлө предметтар буйынса олимпиадалар үткәрелә. Яҡшы һәҙәмтә күрһәтеүселәргә стипендияға ҡушылып, өҫтәмә аҡса бүленә. Колледж студенттары, теорияла ғына туҡталып ҡалмай, белемдәрен практикала ла нығыта. III курстан башлап мәктәптәрҙә практика үтәләр.

Миңә бында белем алыуы бик оҡшай. Ни өсөн тигәндә, яҡшы уҡырға, уңышҡа өлгәшергә теләгән һәр студентҡа бындағы уҡытыусылар һәр саҡ ярҙам итергә әҙер. Бары тик теләк һәм сәм генә булыуы шарт.

**Вилнара ҒӘЛИӘКБӘРОВА,**
**"Аманат"тың йәш хәбәрсеһе,**
**Мәсәғүт педагогия**
**колледжы студентҡаһы.**

# Минең ғаиләм

Ғаиләбеҙ менән Йылайырҙан Өфөгә күсеп килгәндә һеңлем менән беҙ бәләкәй инек. Иң иҫтә ҡалғаны – баш ҡалалағы йорттарҙың бейеклеге, машиналарҙың күплеге һәм кешеләрҙең ҡайҙалыр ашығыуы булды.

Хәҙер Өфөнөң урамдарын да беләм, хатта мәктәпкә лә үҙем килә алам. Ғаиләбеҙ менән баш ҡаланың иҫтәлекле, матур урындарын өйрәнәбеҙ. Ял көндәрендә музейҙарға, театрҙарға, парктарға барабыҙ. Миңә иң оҡшаға урын – ул Салауат Юлаев һәйкәле. Конгресс-холл төҙөлгәс, был урын тағы ла йәмләнде. "Тамыр" студияһына барып, телевизорға төшөүе лә бик ҡыҙыҡлы.

Һеңлем менән икебеҙ ҙә Өфө дәүләт сәнғәт академияһы эргәһендәге махсус урта музыка колледжында белем алабыҙ. Композитор Заһир Исмәғилев асҡан был мәктәп беҙгә бик оҡшай. Атай-әсәйем дә беҙҙең өсөн һөйөнөп бөтә алмай.

Каникул ваҡыттарында Баймаҡ районының Ҡаратал ауылында ғүмер итеүсе Иршат олатайымдың хәлен белергә ҡайтабыҙ. Атайымдың әсәһе Зәкиә ҡартәсәйем, Өфөлә йәшәгәс, үҙе беҙгә йыш ҡунаҡҡа килә. Нисек уҡыуыбыҙ менән һәр саҡ ҡыҙыҡһынып тора.

Былтыр ғаиләбеҙ менән ҡала буйынса үткән ғаилә бәйгеһендә икенсе урын яуланыҡ. Шәжәрәбеҙҙе төҙөп, Шәжәрә байрамында ла ҡатнаштыҡ.

Яратҡан байрамдарыбыҙҙың береһе – ул ҡалабыҙҙың көнө. Унда мин йыл һайын башҡа балалар менән бергә Башҡортостандың Президенты Мортаза Рәхимовты һәм килгән ҡунаҡтарҙы сәләмләйем.

Әсәйем эшләгән 48-се мәктәптәге ҡурай түңәрәгендә лә шөғөлләнәм. Әсәйемде уҡыусылары яратҡанға ҡыуанам.

Атайымдың да эше ауыр. Ул милиционер булып эшләй. Ҡала һағындағы хеҙмәте өсөн үҙен миҙал менән дә бүләкләнеләр. Һеңлем дә тырышып уҡып йөрөй. Шундай татыу ғаиләлә үҫеүемә һөйөнөп бөтә алмайым.

**Асҡар ИГЕЛЕКОВ,**
**Өфө ҡалаһының урта махсус**
**музыка колледжы уҡыусыһы.**

# Беҙ — биш бала. Беҙ — бәхетле!

Беҙҙең ғаилә ишле: әсәйем, атайым, мин, ике ҡустым һәм ике һеңлем. Әсәйем Алһыу Рәдис ҡыҙы һөнәре буйынса уҡытыусы. Үҙ эшен яратып, күңел биреп башҡара. Ғаилә терәге – атайыбыҙ Фаил Йосоп улы мәктәптә оператор эшен башҡара. Улар беҙҙе тәртипле, әҙәпле булырға өйрәтәләр.



Мин IX синыфты тамамлайым. Киләсәктә уҡытыусы булырға теләйем. Ҡустым Анил 8 йәштә, игеҙәктәр Йәмил менән Йәмилә һәм Диана балалар баҡсаһына йөрөй. Мин, өлкәнерәк булғанға, атай менән әсәйгә ярҙам итергә тырышам.

Әсәйебеҙ Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов ҡулынан "Әсәлек даны" миҙалын алып ҡайтты. Күмәк булғас, өйҙә күңелле, бергәләшеп телевизор ҡарайбыҙ, гәзит-журналдар уҡыйбыҙ, өйгә эштәрҙе бергәләшеп башҡарабыҙ. Ҡыҙҙар әсәйгә өй эштәрендә ярҙам итһә, малайҙар атайға йорт эштәрендә булыша. Бына шулай матур итеп йәшәбеҙ.

Донъялағы бөтә балалар ҙа, минең кеүек, ғаилә йылыһын, ата-әсә наҙын тойоп үҫһен ине.

**Аделина ҠАРАБАЕВА.**
**Ҡыйғы районының Алағуз ауылы.**
**ҺҮРӘТТӘ: әсәйем Диана һеңлем менән.**

# Олатайым

Әхмәҙей ҡартатайымдың бала сағы ауыр һуғыш йылдарына тура килә. Шулай ҙа тырыш, көслө ихтыярлы, эшһөйәр булып буйға еткән егет тормош һынауҙарына бирешмәй.

Егерме йәшендә ил һағына баҫа. Алыҫ Венгрияла дүрт йыл хеҙмәт итеп ҡайтҡас, кесе ветфельдшерҙар курсында уҡый. Ҡырҡ йыл ғүмерен ошо һөнәргә бағышлай. Эшләгән йылдарында ҡартатайым хаҡында гәзит биттәрендә маҡтап яҙалар, бихисап Маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләйҙәр. Бер тапҡыр Мәскәүгә барыу бәхете лә тейә.

Ғаиләһен дә бик матур итеп ҡора. Хәҙисә ҡартәсәйем менән алты балаға ғүмер биреп, оло тормош юлына баҫтыралар. Бөгөн ҡартәсәйемдең күкрәген "Әсәлек даны" миҙалы биҙәй.

Хаҡлы ялда булһалар ҙа, ҡартәсәйем менән ҡартатайым һаман да мал-тыуар аҫрап, балаларына ярҙам итеп, матур, етеш донъя көтә.

Йәй көндәрендә ҡартатай менән бесәнгә йөрөргә яратам. "Аллаға шөкөр, эшләй алырлыҡмын әле", – тип һәнәктәрен арбаға һалып, Турыҡайы менән елдереп туғайға сығып киткәндә уға күптәрҙең һоҡланып ҡарап ҡалғанын һиҙәм.

Быйыл ғәзиздәребеҙ бергә ғүмер итеүҙәренең 55 йыллығын билдәләй. Уларға тағы ла оҙон-оҙаҡ йылдар йәнәш атлауҙарын, ныҡлы һаулыҡ, бәхетле ҡартлыҡ теләйем.

**Айгиз ӘҘЕҺӘМОВ.**
**Йылайыр районы, Һабыр ауылы.**

## "Аманат" ваҡыты менән йәшәгеҙ!

Хөрмәтле уҡыусылар! Май һанында түбәндәге сәғәттең ошондай уҡ сирек өлөшөн баҫып сығарғайныҡ. Артабан һеҙҙең бурыс – ошо һәм июль-август айҙарында сығасаҡ һандарҙан ҡырҡып алып, ошондай сирек өлөшсәләрҙән "Аманат"тың сувенир сәғәте һүрәтен йыйып, бергә йәбештереп, беҙгә ебәреү. Артына, әлбиттә, үҙегеҙ тураһында мәғлүмәттәрҙе тултыраһығыҙ.

Беҙҙең бурыс – редакцияға килгән һүрәттәр араһында лотерея үткәреп, һүрәттәге сәғәттең ысынын еңеүсегә тантаналы тапшырыу.

Уйындың йомғағы сентябрҙә иғлан ителәсәк.




**Әйткәндәй, "Аманат"ҡа 15 июлгә саҡлы яҙылһағыҙ, ул һеҙгә 1 августан килә башлар.**

# Һабыр – ерҙең үҙәгендә!

Йылайыр районының Һабыр ауылы Хәйбулла районы сигендә генә, Һаҡмар йылғаһы буйында, ҡалын Урал урмандарының ҡола ялан яҡҡа әйләнгән һыҙатында ята. Заманында волость үҙәге булған, тәрән тарихлы ауылдың мәктәбе лә 130 йыллығын билдәләгән икән. Мәктәп музейында Үҫәргән волосының ауыл старосталары сходында 1876 йылдың 12 октябрендә Һабыр ауылында земство мәктәбен асыу тураһында ҡабул ителгән ҡарар күсермәһе һаҡлана. Уға тиклем





уҡ Һабыр мәсете янында мәҙрәсә эшләгәнлеге билдәле.

Был ауылда “Аманат”ты яратҡан уҡыусылар күп – редакция почтаһында “Йылайыр районының Һабыр мәктәбе” тип билдәләнгән төрлө темаларға хаттар гел килеп сығып тора. Беҙҙең бер йәш хәбәрсебеҙ Зарина Бағышаева ошо ауылдан булһа, быйыл иһә беҙ был мәктәпкә 9-сы синыф уҡыусыһы Таңсулпан Атанғоловаға “Аманат” журналының йәш хәбәрсеһе танытмаһын тапшырырға барып сыҡтыҡ. Ул быйыл башҡорт теленән республика олимпиадаһында – беренсе, Башҡортостан мәҙәниәте буйынса икенсе урын яулап, Ҡара диңгеҙ буйындағы “Орленок” балалар лагерында ике аҙна буйы уҡып һәм ял итеп ҡайтып тора ине.



**“Аманат”тың баш мөхәррире Сәлмән Ярмуллин Таңсулпан Атанғоловаға йәш хәбәрсе танытмаһын тапшыра.**

Әйткәндәй, был мәктәп уҡыусыларының йыл һайын “Урал батыр” йәш сәсәндәр бәйгеһендә еңеүҙәр яулап тороуы барыһына ла мәғлүм. Улар 2002 һәм 2003 йылда гран-при яулағандар, аҙаҡ та призлы урындарҙан ҡалмағандар. “Башҡаларға ла урындар әләкһен тип, йыл һайын еңеп тормаҫҡа булдыҡ,” – тип шаярталар һабырҙар. Уҡытыусыларҙан торған “Душауай” фольклор халыҡ ансамбле лә республика кимәлендә билдәле коллектив. Йәмле Һаҡмар буйында, әммә ҡырыҫ тәбиғәт ҡосағында ултырған ауыл мәктәбе, әргә-тирәһен яҙҙан көҙгә тиклем шау сәскәгә күмеп, “Йәшел биҙәк” республика конкурсында ла гел призлы урындар яулай икән. Бына шулай, һәр нигә ижади ҡараған, тырыш кешеләр йәшәй Һабырҙа.

Һабырҙар Башҡортостандың көньяҡ төбәгендә тағы ла спорт ҡаҙаныштары менән дә дан ҡаҙанған. Тренерҙары Венер Тәлғәт улы



Таһиров етәкселегендә бында милли көрәш һәм самбо менән шөғөлләнәләр. Районда беренсе урын алып ҡайтҡан Нияз Солтанов менән Сәлимгәрәй Тапаҡов беҙҙең үтенес буйынса мәктәп алдындағы сиҙәмдә самбо буйынса **(өҫтәге һүрәттә)**, ә төбәк ярыштар призерҙары Иштуған Тапаҡов менән Илшат Тәкәев милли көрәш буйынса үҙенсәлекле алымдар ҙа күрһәттеләр **(урталағы һүрәттә)**. Спортзал юҡлыҡтан түгел – ҡайһы малайҙың йәм-йәшел сиҙәмдә көрмәкләшкеһе килмәһен?



– Уҡыу-уҡытыу эшендә һәр кемде фәнни эҙләнеү һәм ижад эшенә йәлеп итеүҙе беҙ төп йүнәлеш итеп алғанбыҙ, – тип аңлатты бәләкәй генә мәктәптең бик күп өлкәләрҙә ҙур ҡаҙаныштарға ирешә алыуын директор Юлай Яңыбай улы Ураҙғолов. – Төрлө яҡтан яулаған гранттарға беҙ физика, география, биология, башҡорт теле, компьютер кластары алдыҡ. 88 бала уҡыған мәктәптә һәр дүрт балаға бер компьютер тура килә. Уҡытыусыларыбыҙҙың кимәле юғары, шуға ла уҡыусыларының күбеле юғары уҡыу йорттарына инеп тора.

“Беҙҙең өҫөн төпкөл, йыраҡ яҡ тигән төшенсә юҡ – үҙебеҙ йәшәгән төбәкте ерҙең үҙәге тибеҙ ҙә йөрөйбеҙ”, – тигәйнеләр миңә бер тапҡыр, Башҡортостандың иң төпкөл ауылына барып сығырға яҙғас. Ысынлап та, Мостай Кәрим әйтмешләй, Мәскәү беҙҙән йыраҡмы, әллә беҙ – Мәскәүҙәнме, ҡайһы яҡтан ҡарайһың бит. Һабырҙар ҙа шулай уйлай: Хоҙай үҙе, ошонда йәшә, тип донъялағы иң йәмле урынды тотторған икән, ул ерҙе артабан да матурларға, ҡурсаларға ла кәрәк, ә быны өсөн эшһөйәр ҙә, күпбелер ҙә, аҡыллы ла, тынғыһыҙ ҙа булып үҫергә кәрәк. Ябаймы? Ябай. Дөрөҫмө? Дөрөҫ.

Өфөгә ҡайтҡас интернеттан Һабыр ауылын эҙләп ҡараным. Һылтанмалар бик күп килеп сыҡты, ә мәктәптең үҙенең сайты теләһә ҡайһы ҡала мәктәбенә өлгө булырлыҡ. Ысынлап та, глобалләштереү тигән дәүер сиктәрҙе юйған саҡта, һәр кем дә үҙен ер үҙәге тип һанай ала икән шул. Ә үҙәк булғас, ул ныҡ булырға тейеш. Һәр яҡтан да.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**
**Илһам ӘХМӘҘУЛЛИН фотолары.**



**– Был малайҙар менән тау аҡтарырға була, – ти Венер Таһиров.**

# БАШҠАЛАРҘАН ФӘҺЕМ АЛ

**Бер нисә йыл Италияла эшләгәндән һуң “Аманат”ты уҡыусыларға итальян балалары, уларҙың холоҡ-фиғелдәре, шөғөлдәре, нисек көн үткәреүҙәре тураһында һөйләгем килде. Бөтә нәмә сағыштырыуҙарҙа күренә бит, бәлки минең был яҙмам беҙҙең үсмер быуынға фәһем булыр.**

Беҙҙең ауыл балалары ата-әсәһенә бәләкәйҙән ярҙам итеп үҫкән кеүек, унда ла бик күптәре уҡыуҙан һуң ата-әсәһе янында бутала. Тик ҡалала ғына шулай. Ауылда эш бик ауыр, кескәйҙәрҙе көсәндермәйҙәр. Ҡалала иһә балалар, ғәмәлдә, ата-әсәһенә һатыу итергә ярҙамлаша. Был уларға аҡрынлап тәжрибә тупларға ярҙам итә, әлбиттә. Киләсәктә кәрәк буласаҡ ул уларға, сөнки Италияла иктисад шәхси эшҡыуарҙар ҡулында, бизнес атаһынан балаһына күсә килә. Ауылдарҙа ла ата-әсә эше улдары менән ҡыҙҙарына күсә. Ә уға тиклем уларҙың шөғөлө – уйын, күп ваҡыттары урамда үтә.

Италияла футбол ныҡ үҫеш алғанын беләһегеҙ инде. Ауыл-ҡасабаларҙың байтағында стадион төҙөлгән, һәр ҡайһыһында балаларҙың футбол командалары бар. Тренерҙар көн һайын күнекмәләр үткәрә. Ауылдар командалары араһында ярыштар бара. Ҡыҫҡаһы, стадионда тауыш төш ваҡытында ғына тынып тора, сөнки Италияла төшкө аштан һуң кәм тигәндә ике сәғәт ял итеү ҡағиҙәһе бар. Шуға ла төштән һуң бөтә ер тынып ҡала, сауҙа нөктәләре, халыҡты хеҙмәтләндереү, туҡланыу урындары ябыла.

Башҡа балалар, бигерәк тә ҡыҙҙар төрлө-төрлө секцияларға йөрөй. Ундай түңәрәктәр һәр ерҙә, шул иҫәптән ауылдарҙа ла эшләй. Социаль үҙәк тип аталған бинала һүрәт төшөрөү, йырлау-бейеү, сигеү, тегеү һәм башҡа шөғөл менән шөғөлләнеп була. Шулай уҡ төрлө ризыҡ әҙерләргә лә өйрәнергә мөмкин – бина кухняһыҙ булмай.

Ҡалаларҙа ҡөҙрәтенә урын тапмай ҡаңғырып йөрөгән үсмерҙәр ҙә бар. Ундайҙарға тап булыу сит илдәрҙән килгән кешеләргә ҡурҡыныс. Улар, ғәмәлдә, бер нисә кеше була һәм өйөрө менән ябырыла. Ярай ҙа, сумкаңды тартып алып ҡына китһәләр. Имгәткәнсе туҡмауҙары ла мөмкин.

Италияла балалар үҙ теләгенә ирешергә күнегеп үҫә. Ни өсөндөр ата-әсә уларҙы тыйыу яғын ҡарамай, талабын үтәргә тырыша. Шулай ҙа, үҫеп еткәс, кесе быуын ата-әсәһен тыңлашмай йөрөмәй, уларҙы онотмай, ташламай, ярҙам итергә тырышып ята, өлкәндәрҙең хәлен белергә бик йыш килеп йөрөй. Бик йыраҡ йәшәгәндәре өҙлөкһөҙ телефондан шылтыратып тора. Был һәйбәт ғәҙәт беҙҙең балаларға ла ҡамасауламаҫ ине.

Итальяндарҙың ауыҙында һүҙ тормай, һәр ишеткәнен улар шунда уҡ кем менән булһа ла уртаҡлашырға ашыға. Үҙҙәренең һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй – бик һүҙсән халыҡ. Балалар ҙа шулай. Юлда тап булып, бер яҡка бергә атлаһаң, ҡайҙа йәшәгәнен дә, ата-әсәһе кем икәнен дә, ғаиләлә нисә бала булыуын да, атаһы ҡайҙа эшләгәнен дә (әсәй эшләмәй инде ул), үҙе ниндәй класта уҡығанын да, мәктәптән һуң үҙенә ниндәй шөғөл тапҡанын да beләһең. Уларҙың һәр бер нәмә тураһында ата-әсәһенә, туғандарына һөйләп тороуы, бер яҡтан, һәйбәт: ниндәйҙер көсөргәнешле, хатта бик ауыр хәл килеп тыуғанда ла проблеманы нисек хәл итергә белмәй йөрөп, хата ҡарар ҡабул итеү булмаясаҡ.

Үсмерҙәр генә хәл итә алмаҫлыҡ ваҡиғалар була. Ул осраҡтарҙа кемдәндер, бигерәк тә өлкәндәрҙән, кәңәш, ярҙам һорау зарур, хатта мотлаҡ кәрәк. Был бер кемде лә кәмһетмәй.

Февраль айы етһә, Италияла карнавалдар башлана. Ниндәй генә маскалар күрмәҫһең! Маскаһыҙҙар ҙа бар. Улары йә милли кейемдә, йә ниндәйҙер һөнәрҙең махсус кейемендә була.

Карнавалда ҡатнашыу бишектән башлана, тиһәң дә хата булмаҫ, сөнки ата-әсә балаларына каранавал кейемен бала саҡтарынан уҡ алып кейҙерә. Әйтергә кәрәк, карнавал кейеме



һәм маска арзан тормай. Әммә итальяндар балаларын ғөрөф-ғәҙәткә бәләкәстән өйрәтеү хаҡына аҡса йәлләмәйҙәр. Ә карнавалды улар көтөп ала, алдан уҡ әҙерләнә башлай.

Балалар карнавалда кейгән кейемдәрҙән миңә бик ныҡ оҡшағаны карабинер малай кейеме булды **(һулдағы һүрәттә)**. Әсәһе менән уны карнавал үтәсәк майҙанға атаһы – өлкән карабинер килтереп китте. Ул үҙе улының үткәнен ҡарай алмаясаҡ – был көндө бөтә хоҡуҡ һаҡлау системаһы көсәйтелгән режимда эшләй, берәһенә лә ял юҡ. Италияла хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәренә хөрмәт менән ҡарайҙар, шуға ла балалары атаһының махсус кейемен теләп тектерә һәм уны кейел, ғорурлыҡ менән үтә.

Төбәк карнавалдары Венециялағы ҙур карнавал менән тамамлана. Унда төрлө кешеләр үҙҙәренең милли костюмдарында сыға. Шулай итеп улар үҙ халҡына һәм милли кейеменә иғтибар тыуҙырырға тырыша. Беҙҙең елән-сапандар ҙа, күлдәк-камзулдар ҙа, ҡамсат бүрек һәм ҡашмауҙар ҙа күҙҙең яуын алырлыҡ бит. Берәйһе Венеция карнавалына кейеп барһа, уның менән фотоға төшөргә теләүселәр бихисап булыр, тип уйлайым. Киләсәктә, балалар,



һеҙ үҫеп еткәс, бәлки, арағыҙҙан Венеция карнавалына барырға теләүсе табылыр. Беҙҙең башҡорт кейеме парадтан үтеүе халҡыбыҙҙа бик тә йылы тойғолар, ғорурлыҡ уятыр ине, тип хыялланып та ҡуям.

Бында һәр төбәктең үҙ теле, үҙ йолалары. Йыр-бейеүҙәр ҙә айырылып тора. Кесе быуында ғөрөф-ғәҙәттәргә иғтибарлы мөнәсәбәт тәрбиәләү бик юғары кимәлгә ҡуйылған. Балалар милли кейем кейеп, төрлө концерттарҙа ҡатнаша, телевидениенан сығыш яһай. Улар араһында матур йырлаусы, бейеүсе, милли музыка ҡоралдарында оҫта уйнаусылар бар.

Беҙҙең ҡурай кеүек һыбыҙғылары бар. Улар өс төрлө оҙонлоҡта һәм уның өсөһөн бер юлы ауыҙға ҡабып уйнайҙар. Уларҙың был музыка ҡоралдарында тишектәр өҫкө яҡтан тишелә. Изге көнөн байрам иткәндә концертта мотлаҡ бер нисә быуын сығыш яһай. Йыш ҡына улар бер ғаиләнән була.

Италияла әсәйҙәрҙең күбеһе эшләмәй өйҙә ултырһа ла, кескәйҙәрҙе балалар баҡсаһына биреүселәр күп. Ә мәктәп, беҙҙәге кеүек, өс баҫҡыстан тора: башланғыс мәктәп, урта мәктәп. Урта мәктәптең һуңғы йылдарында ҡайһы бер кластар профессиональ синыфҡа әйләнә. Әйтәйек, ҡыҙҙарҙы шәфҡәт туташы һөнәренә өйрәтеүсе кластар бар.

Беҙҙәге кеүек, өлгәшмәгән уҡыусыларҙы артабан күсермәй, көҙгә тиклем ҡалдырыу ҙа бар. Ә белемгә килгәндә, уның кимәле беҙҙең хәҙерге быуындың белеменән әллә ни айырылмай. Күрәһең, белем кимәленең түбәнәйеүе донъя масштабындағы тенденциялыр.

Мәктәп формаһын башланғыс синыфтарҙа ғына кейәләр. Ҡыҙ балалар үҙенең кейеме өҫтөнән аҡ халат, малайҙар ҡараһыу-зәңгәр халат кейә.

Башланғыс синыф уҡыусыларын бөтә ерҙә, хатта Неаполь кеүек күп миллионлы ҡалаларҙа ла мотлаҡ мәктәп автобусы менән йөрөтәләр: ул иртән өйҙәре тирәһенән йыйып алып мәктәпкә илтә һәм дәрестән һуң тейешле урынға килтереп ҡуя. Ә унда инде әсәһе көтөп тора.

Балаларҙы тормошҡа әҙерләүҙә дәүләт кенә түгел, дини ойошмалар, йәғни Ватикан да иғтибарһыҙ ҡалдырмай. 11 йә 12 йәшкә еткәс, халыҡ телендә катекизмо тип аталған занятиелар башлана. Уны өйрәнә башлау үҙе бер байрам: баланы тантаналы рәүештә ҡабул итәләр. Ата-әсәһе был ваҡиғаны ресторанда билдәләп үтә. Был занятиеларҙа дини доғалар һәм ҡанундарҙы үҙләштереү генә түгел, донъя көтөргә өйрәтеү ҙә бара. Күрәһең, шунлыҡтан бәләкәс сағында ни теләһә шуны эшләргә өйрәнеп үҫкән итальяндар законға буйһоноусан, өлкән быуынға иғтибарлы булалыр.

**Гөлсимә РИЗУАНОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

**“Бөйөк Еңеү” конкурсына килгән мәкәләләрҙең бик күп булыуы сәбәпле, беҙ конкурсты йыл аҙағына тиклем һуҙырға карар иттек. Йомғаклау һәм еңеүселәрҙе билдәләү декабрҙә буласак.**

## БЫЛ ЕҢЕҮҘЕҢ ДАНЫ ҺҮРЕЛМӘҪ



Минең олатайым Әмир Ғизметдин улы Ибраһимов та ҙур еңеүгә үҙ өлөшөн индергән. Ул 1914 йылдың 15 апрелендә Ҡыҫыҡ ауылында (хәҙер ул ауыл юҡ) донъяға килә. Бала сағы ауыр була. 5 йәшендә үкһеҙ етем ҡалып (ата-әсәһе тиф ауырыуынан үлә), ағаһы Ғилметдин тәрбиәһендә үҫә.

1932 йылда бухгалтерҙар курсын бөткәс, Аҫҡар ауыл Советы секретары булып эш башлай. 1940 йылдың июнь айында хәрби хеҙмәткә алына. Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көндәренән, ҡаты яраланғанға тиклем, һуғышта ҡатнаша. Госпиталдә ятып һауығып сыға һәм яңынан һуғыш яланына әйләнеп ҡайта. Күп ҡаршылыҡтар, кәртәләр аша үтергә тура килә уға. 1945 йылда һуғыштан ҡайта. 1947 – 1951 йылдарҙа Брәтәк балалар йорто директоры, 1951 – 1952 йылдарҙа Аҫҡар ауыл Советы рәйесе була. 1965 – 1969 йылдарҙа, пенсияға сыҡҡансы, “Фрунзе” исемендәге колхоздың партком секретары булып эшләй.

Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн I дәрәжә Ватан һуғышы ордены, “Батырлыҡ өсөн”, “Германияны еңгән өсөн”, “Жуков миҙалы”, һуғыштан һуңғы тырыш хеҙмәте өсөн В. И. Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған “Фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн” миҙалдары менән бүләкләнгән. Олатайым тәүгеләрҙән булып районның Дан почет кенәгәһенә индерелә. Ошолар уның намыҫлы хеҙмәтенә оло баһа булып тора.

Өләсәйем Рабиға Зариф ҡыҙы – тыл ветераны. Ул да Еңеү көнөн яҡынайтыу өсөн бар тырышлығын һалып эшләгән. Олатайым менән өләсәйем 6 балаға ғүмер һәм тәрбиә бирәләр.

Тик бер кем дә был яҡты донъяға мәңгелеккә килмәгән. Олатайыма – 92, өләсәйемә 83 йәш булғанда, оҙаҡ һәм ҡаты ауырыуҙарҙан һуң, беҙҙе, 17 ейән-ейәнсәрҙәрен, 7 бүлә-бүләсәрҙәрен ҡалдырып, баҡыйлыҡҡа күстеләр. Уларҙың яҡты иҫтәлеге беҙҙең күңелдәрҙә мәңге һаҡланыр.

**Гөлсәсәк ИБРАҺИМОВА,**
**Бөрйән районының**
**Аҫҡар мәктәбе уҡыусыһы.**

## БЕР КӨНДӘ ИКЕ ОРДЕН

**Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға – 65 йыл. Күңелдәрҙә һағыш та, тулҡынландырғыс хистәр ҙә бар. Ирек, еребеҙ өсөн һуғышҡан ветерандарҙың күбеһе хәҙер инде арабыҙҙа юҡ. Ә дошманға ҡаршы күтәрелгән батыр йөрәкле егеттәрҙең һәм ҡыҙҙарҙың иҫәндәре һикһәнгә еткән, туғыҙынсы тиҫтәне башлағандар. Беҙ, тере тарихты иҫтә ҡалдырыр өсөн, һәр ишеткән-күргәнде аҡҡа теркәп барырға тейешбеҙ.**

Минең олатайым Ғәләмбай Мырҙабай улы Нәбиуллин да Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Олатай һуғышҡа 1941 йылда, 17 генә йәшендә алына. Курск дуғаһы һуғышында, Белгородты алыуҙа, Румынияны азат итеүҙә ҡатнаша. Яу юлын Бухареста тамамлай. Һуғышта өс тапҡыр яралана. Батырлыҡтары өсөн кесе сержант Нәбиуллин Ҡыҙыл Йондоҙ, III дәрәжә Дан ордены, күп миҙалдар, отличник-разведчик билдәһе, Маҡтау грамоталары менән бүләкләнә.

Тыуған ауылына ҡайтҡас, колхозда эшләй. Ғаилә ҡороп, өләсәйем менән 12 балаға ғүмер бирәләр.

1987 йылда яҡты донъянан китеп барҙы олатай. Беҙ уны онотмайбыҙ, Еңеү көнөндә ҡәберенә барып, сәскәләр һалып, иҫкә алабыҙ.

Олатай иҫән саҡта һуғышта үҙе менән булған күп хәлдәрҙе һөйләп ҡалдырған. Бына шуларҙың берәүһе.

“1941 йылдың ҡыш айында Латвияның Юрди тигән хуторы эргәһенә килеп еттек. Хутор эргәһендә өс көн туҡтауһыҙ һуғыш барҙы. Был ҡаты алышта беҙҙең бөтә командирҙар ҙа һәләк булып бөттө, тик 375-се полктан бер капитан ғына тороп ҡалды. Ул мине саҡырып алып, һалдаттарҙы йыйҙы ла, рота командиры вазифаһын тапшырҙы. Беҙҙең дивизия менән бәйләнеш өҙөлгән, ҡайҙа икәнен дә белмәйбеҙ. Немецтар тағы һөжүмгә күтәрелде. Мин ракета менән сигнал бирмәйенсә, бер кемгә лә атмаҫҡа ҡуштым. Бер 150 метр самаһы ҡалғас, сигнал бирҙем. Ике пушка һәм автоматтар менән фашистарҙы ҡыра башланыҡ. Танкыларҙы һөжүмгә сығарҙым, улар артынса беҙ ҙә күтәрелдек һәм өс көн буйы полк яулай алмаған урынды барып алдыҡ. Дивизиянан өҫтәлмә көс килгәнсе, оборона тоторға, бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә бойороҡ булды. Ике көндән өҫтәлмә көс килгәс кенә беҙҙе ялға сығарҙылар. Ял ваҡытында мунса инеп таҙарындыҡ, кейемдәрҙе алмаштырҙыҡ. Бер-ике көн ял иткәс, алғы һыҙыҡҡа китер өсөн сафҡа теҙҙеләр. Шул ваҡыт полковник Коваленко миңә саф алдына сығырған ҡушты. Тантаналы рәүештә түшемә Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән III дәрәжә Дан ордены таҡты”.

Ҡарамаҡҡа ябай һуғыш күренештәре бәйән ителгән һымаҡ, ә һәр береһендә ябай совет һалдатының иҫ киткес ҡыйыулыҡ, таҫыллыҡ, батырлыҡ сифаттары асыла. Мин олатайым исеме менән сикһеҙ ғорурланам.

**Әлфинә НӘБИУЛЛИНА,**
**Бөрйән районының**
**Нәби мәктәбе уҡыусыһы.**

## ИРЕН ИКЕ ТАПҠЫР ҺУҒЫШҠА ОҘАТҠАН ӨЛӘСӘЙЕМ

Минең өләсәйем Хөмәйрә Мөхәмәдиә ҡыҙы Йыһаннурова 1915 йылда хәҙерге Бөрйән районының Ҡолғана ауылында тыуған. Биш ағаһы һәм ике ҡустыһы булған. 1931 йылда Әхмәт ауылына тормошҡа сыҡҡан. Ул ғаиләлә ҡәйнәһе Яҡшыбикә, ҡәйнеше Ғәлимйән һәм ике ҡайынһеңлеһе Латифа, Фатима булған. Олатайым Муллайән менән бик матур итеп тормош ҡороп йәшәп киткәндәр. Бер-бер артлы балалары донъяға килгән. Улына Сабирйән (1936 й.), ике ҡыҙҙарына Хәмирә (1938 й.) һәм Нурия (1941 й.) тип исем ҡушҡандар.

1941 йылда һуғыш башланып китә. Ауылдағы бөтә ир-егеттәрҙе һуғышҡа алып китә башлайҙар. Шулар араһында минең олатайым һәм уның ҡустыһы ла була. Бөтә колхоздың эше ҡатын-ҡыҙҙар һәм үҫмер малайҙарҙың иңенә төшә. Өләсәйемдең балалары бәләкәс булғас, уларҙы өйҙә ҡалдырып китер булған һәм уға ниндәй эш ҡушһалар, шунда эшләгән. Ашлыҡ һуҡҡандар, бесән әҙерләгәндәр. Ҡыш көнө ферма эшселәренә үгеҙ егеп утын ташыған, яҙ еткәс, үгеҙ менән сәсеүгә сыҡҡан.

Олатайым Муллайән 1942 йылда яраланып һуғыштан ҡайтҡан. Яраһы төҙәлгәнсе фермала бригадир вазифаһын үтәгән. Аяғы йүнәлеү менән кире һуғышҡа китә. Олатайым һуғышҡа китеү менән, 1943 йылда ҡыҙҙары Маһинур тыуа. Ул минең атайымдың әсәһе була. Хөмәйрә өләсәй, бала тыуҙы, тип өйҙә ултырмай, уны ҡәйнәһенә ҡалдырып, тағы эшкә сыға.

Ошо ҡәһәрле һуғышта өләсәйҙең ағайҙары Нух, Аллаяр, Мөхәммәт, ҡустыһы Әхмәт һәм ҡәйнеше Ғәлимйән батырҙарса һәләк булған. Ә ике ағаһы Ишмөхәмәт менән Абдулла һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайтып, матур итеп донъя ҡороп ебәргәндәр.

Олатайым да һуғыштан иҫән-һау ҡайтып төшә. 1947 йылда Закирйән, 1949 йылда Шәрифйән һәм 1951 йылда Насирйән исемле улдары тыуа. Гөрләтеп донъя көтөп китәләр, әммә һуғышта алған яранан 1967 йылда олатайым вафат булып ҡала. Тормоштоң булған ауырлыҡтары өләсәйемдең иңдәренә төшә.

Аллаға шөкөр, балаларымды аяҡҡа баҫтырҙым, үҙ урындарын таптылар, тип ҡыуана өләсәйем. Бөгөнгө көндә ул ҡыҙы Маһинурҙа йәшәй. Беҙгә ҡыуаныс, сөнки өләсәйем еңеүҙең 65 йыллығына имен-һау килеп етте. Хәҙерге көндә өләсәйемдең 20 ейән-ейәнсәре, 48 бүләбүләсәһе бар. Мин бик бәхетлемен, сөнки ул минең генә өләсәйем түгел, атайымдың да өләсәһе. Беҙ уға бәхетле ҡартлыҡ, һаулыҡ теләйбеҙ.

**Нурия ЯМАЛЕТДИНОВА.**
**Әбйәлил районы,**
**Атауҙы ауылы.**

Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ

# ФРОНТ ҺЫҘЫҒЫНЫҢ КЕСКӘЙҘӘР ЙӨРӘГЕ АША ҮТКӘНЕ



## Һуғыш осоро малайҙарының хыялы

Малайлыҡ – һәр саҡ малайлыҡ инде ул. Һуғыш барғанда ла, малайҙар малайҙар булып ҡалды. Олораҡ малайҙар, ат урынына егелеп, ҡыштарын бәләкәй сана менән утын, бесән ташыһалар ҙа, шул уҡ сана менән йә аяҡтарына саңғы тағаһалып, һырғалаҡ эйергә ярата ине. Уларҙан беҙ ҙә ҡалышмаҫҡа тырышабыҙ. Һеҙөмтәлә тау буйҙары шымарып, ялтлап ята торғайны. Хәҙер генә ул. Ашағандарын да һеңдерә алмайынса, бөтәһе лә телевизорға, компьютерға өңшәйешеп ултыра.

Һуғыш ваҡытында кистәрен малайҙар, йыйылышып, әкиәт тыңларға йөрөрҙәр ине. Бик булмаһа тиңдәштәренең берәйһенә йыйылырҙар ине. Ағайҙарға эйәреп барған беҙ бәләкәйҙәр йә йомаҡ өйөшәбеҙ. Ағайҙар әңгәмә ҡора. Гитлер тураһында мин, бәлки, тәүләп шунда ишеткәнмендер әле ул.

## Ағайымдың посылкаһы

Көндәрҙән бер көндө почтальон:

– Байназарға үҙегеҙ барып, посылкағыҙҙы алығыҙ, – тип әйтеп китте. Әсәйем эштән ҡайтҡас, шул турала әйткәйнек, ул:

– Бынауындай һуғыш тигән мәхшәр ваҡытында кем посылка ебәреп ята икән, – тип аптыра ла кит. Тора биргәс: – Яңылышҡандыр ул, – тип ҡуйҙы, почтальондың хәбәренә шик белдереп.

Байназар мәктәбенә йөрөп уҡыған Мөхәмәтзәки ағайым йыбанмаған, иртәгеһенә, почтаға инеп, теге посылканы алып ҡайтты (был һөйләмдә,“мәктәбенә”, тигәнем – шартлы һүҙ. Сөнки дәрестән ҡайта ла ағайым, кисә фәләндәрҙең өйөндә уҡығайныҡ, бөгөн фәлән кешенең өйөндә уҡыныҡ, ти торғайны). Уны күрҙе лә әсәйем:

Бәй, Мөхәмәткилде ағайыңа үҙебеҙ һалған посылка лабаһа! – тип ҡысҡырып ебәрҙе. – Ай әттәгенәһе, бер-бер хәл булып ҡуймаһа ярар ине, – тип иларға иткәйне, ағайымдың:

Беҙ посылка һалғанда, ағайым Өфө госпиталендә ине бит. Хәҙер ул Мәскәүҙә лә инде, әсәй, – тип әйтеүе әсәйебеҙҙе тынысландырҙы.

Ярар, Хоҙайҙың ҡушканы шулдыр. Ҡайтҡан малда хәйер бар, өлөшөн ашаһаң, әйәһе ҡайтыр, тигәндәр. Үҙебеҙҙең ризыҡҡа яҙғандыр, – тип посылканы астырҙы. Ә ул заманына күрә тотош хазина булып тойолдо: унда киндер моҡсайға тултырылған талкан, талкан эсендә ҡаҡланған ит ине. Нисә ай ҡулдан-ҡулға йөрөһә лә, ит боҙолорға уйламаған ине. Шул посылканы уйлайым да, хәҙерге аҡылым менән шундай фекергә киләм: бешереп һаҡланған итте ҡоро талкан эсендә һаҡлау ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған тәжрибә булғандыр, моғайын. Оҙайлы походтарҙа йөрөгәндә, ете тау ашып, ете дарья кисеп, оҙон-оҙон күс юлдары буйлап яҙын – яҙлауға, йәйен – йәйләүгә, көҙөн – көҙләүгә, ҡышын – ҡышлауға (ыҙмаға) күсенгәндә, ризыҡты шулай һаҡлағандарҙыр, моғайын.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул. Үҙебеҙ һалған посылка булһа ла, эсендәген, әсәйемдең, һаҡлағаның – һаҡҡа етә, тигәне буйынса, һаҡлай-һаҡлай ашап бөткәнсе, аҙаҡ иҫкә төшкән һайын уның исеме “Ағайымдан килгән посылка” булды. Ризыҡ наҡыҫ заманда кире ҡайтҡан мал сифа-

(Аҙағы. Башы 4-5-се һандарҙа.)

тындағы шул посылка беҙҙең өсөн ерҙән теләгәнде Хоҙай Тәғәлә күктән биргәндәй, әсәйем әйтмешләй, өҙәккә ялғау булды. Иң мөһиме, әсәйем әйткән һүҙ раҫка сыкты. Мөхәмәткилде ағайым ни өсөн имен-аман ҡайтып төшкән икән, тиһәгеҙ, беҙ уның өлөшөн ашағанға шулай итте ул.

Бына нисек була икән ул тормошта.

## Һуғыш бөткән көн

Ул көн төҫө, булмышы менән мәңге хәтергә уйылған. Туҡта, һүҙ асыуын асҡас, баштан алып бәйән итәйем.

Күршебеҙ Хәбир дуҫым менән, бар донъяны онотҡандай, мәж килеп, беҙҙең өйҙә уйын ҡороп ултырһаҡ, урам яҡ индегебеҙ даһыр-доһор итеп ҡалды (белмәгәндәр белеп ҡалһын, индек тип күҙгәнәктәр, йәғни ырып тишелгән ике бағана аша тығылған шылдырмалы дүрт-биш, уҙа барһа, алты һайғауҙан торған ҡапка ишаратына әйтәләр). Шул арала, быялаһын ярырҙай итеп, бер ҡул Хәбирҙәр яғына сыҡкан тәҙрәбеҙҙе ҡаға башланы. Аңғансы бик тулҡынланыу менән әйтелгән тауыш ишетелде.

Ҡайынбикә! Ҡайынбикә, тим!

Әсәйем, йылдам ғына урындыҡка менә һалып, тәҙрәгә ҡапланды ла:

Әү-әү! Ни бар, килен? – тине ҡобараһы осоп.

Һуғыш бөткән! Һуғыш!

Әсәйем йөрәгенә тотондо ла тиҙ генә, шәлен бөркәнә һалып, теге һөйөнсө алыусы янына ашыкты.

Беҙ ҙә тәҙрәгә ташландыҡ. Һуғышта йөрөгән Әйүп ағайымдың ҡатыны Кинйәбикә еңгәбеҙ тора ине. Тора, тимсе. Ағас тырма йөкмәгән килеш ҡулын болғай-болғай, тағы ниҙер һөйләй, үҙе бейегәндәй ҙә итә ине. Бына ике ҡатын, ҡайынбикә менән килен, ҡосаҡлашты, һәм ... икеһенең дә ҡулбаштары һелкенә башланы.

– Илашалар, – тине Хәбирем шым ғына. Ул шулай тине, әммә минең аңыма барып етмәне: һуғыш бөткәс, кеше илай тиме ни? Аңламаҫһың был өлкәндәрҙе. Һуғышҡа оҙатканда ла – ила, һуғыш бөтһә лә – ила…

Тиҙ генә көпөбеҙҙе кейә һалдыҡ та, Хәбир менән икәүләшеп, беҙ ҙә урамға атылдыҡ. Унда-а-а. Мәхшәр ҡупҡанмы ни! Мәктәп тапҡырындараҡ күмәк ҡатын-ҡыҙ йыйылған. Кинйәбикә еңгәм һымаҡ уҡ, уларҙың да иңбаштарында ағас тырма. Моғайын, йәшелсә сәсергә туғайға китеп барғандарҙыр ҙа, дүрт йыл буйы көткән әлеге изге хәбәрҙе ишетеп, албырғап ҡалғандарҙыр. Сыр-сыу киләләр. Кеме илай, кеме көлә, кеме үҙенә үҙе таҡмаҡ әйтеп, бейей… Шул арала әллә ҡайҙан Мөхәмәтзариф ағай пәйҙә булды. Уны теге апайҙар, еңгәйҙәр күреп ҡалдылар ҙа, тотоп алып, бына бер ваҡыт баш остарына сорғай башламаһындармы! Бер сәрелдәк тауыш шул саҡ шундай саҡырыу ташланы:

Эй, бисәләр! Йолаһын йола итәйек. Йомшаҡ еренән семтейек!

Был саҡырыу шунда уҡ ҡабул ителде, буғай – баш осона сойорғатылған рәйесебеҙ:

Бер тәкә! – тип ҡысҡырҙы.

Әҙ! –тине ҡатын-ҡыҙ хоры.

Бөтә колхоз һыйланырлыҡ һый!

Шулай тигәс кенә, ҡотолдо ҡатын-ҡыҙ ҡулынан колхозыбыҙ башлығы (Был урында ла асыҡлап китәйем. Ишетә, күрә йөрөлдө. Беҙ бәләкәй саҡта, берәй эш буйынса план үтәлһә, арттырып үтәлгәне хаҡында әйтеп тораһы ла түгел, колхоздың рәйесен йә бригадирын тотоп алып сорғау, йомшаҡ ерен семтеп, бүләк йә һый там итеүҙе аңлатыу йолаһы бар ине).

Ололарҙың шулай балаларса шаулашыуына Хәбир менән беҙ икәү ныҡ аптыраштыҡ. Һуғыш бөткәс, һалдаттар ҡайтырға тейеш тә инде. Бына хәҙер генә мылтыҡтарын йөкмәп, теҙелешеп кенә улар тау юлынан төшә башларҙар. Ә апайҙарҙың, еңгәйҙәрҙең унда эше лә юҡ. Беҙ икәү, исмаһам, оло юлдан күҙебеҙҙе алмайбыҙ.

Кем элек күрер икән яуҙан ҡайтыусыларҙы, тип, төшкөлөктө лә онотоп, көнө буйы түбәнге тауҙағы Оло юлды күҙәттек тә күҙәттек. Ә һалдаттар күренмәй ҙә күренмәй. Оҙаҡ көтә торғас, күңелдә шик тыуа башланы. Әллә, һуғыш бөттө, тип алдыҡ хәбәр тараттылар микән? Әллә беҙҙең ауылдыҡылар һуғышҡан яҡта һуғыш бөткәнен белмәй ҡалдылар микән? Ни хәл итмәк кәрәк. Ул саҡта алтышар йәш менән барһаҡ та, беҙҙең өсөн донъя офоҡ менән генә сикләнә ине шул әле.

Һуғыш бөтөү хәбәрен ишеткән көндө, былар минһеҙ нишләрҙәр икән, тигән кеүек, Ҡояш, бөтөнләй күренмәҫлек булып, ҡалын болот аҫтына йәшенгән ине. Уның юҡлығынан файҙаланып, ваҡ ҡына ямғыр ҙа һибәләп алды буғай. Беҙ, ике күҙәтсе, тештәр тешкә теймәҫлек булып өшөп бөттөк.

Эйе, һуғыш бөткән көн (ул саҡта "Еңеү" һүҙе бөтөнләй ҡулланылманы) бик һалҡын булды. Әммә күңелдәрҙә, быға саса кисерелмәгән йылылыҡ ине. Әйтерһең, күкте ташлап, Ҡояш һәр беребеҙҙең күкрәгенә оялағайны. Беҙ, сабыйлыҡ менән әле генә хушлашып килгәндәр, шуны кисергәс, өлкәндәргә ни һан! Эйе бит.

# ҒҮМЕРҘӘР ИКЕ КИЛМӘЙ БИТ…

## Үҫмерҙәр ни өсөн үҙ-үҙенә ҡул һала?



Статистиканан күренеүенсә, Рәсәйҙә балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең үҙ-үҙенә ҡул һалыуы, йәғни суицид осраҡтарының 92 проценты ғаилә менән мәктәп арҡаһында килеп сыға икән. Әлбиттә, үҫмерҙе борсоған проблеманы аңлап, ваҡытында иғтибар биргәндә, фажиғәне булдырмаҫҡа ла мөмкин. Иң беренсе сиратта, бала өсөн яуаплылыҡ ата-әсәләр һәм педагогтар иңенә ятырға тейеш. Ҡыҙғаныска ҡаршы, тейеш, тип мәкәлә яҙыуы йәки ауыҙ тултырып хәбәр һөйләүе генә еңел. Тормошта бит барыһы ла һин теләгәнсә генә бармай. Ата-әсәләрҙең йыш ҡына балаларына иғтибар бүлергә, уй-хистәре менән ҡыҙыҡһынып торорға йә ваҡыты юҡ, йә хәмер ҡоло булып, үҙҙәре психиатр, нарколог ярҙамына мохтаж...

Мәктәптәрҙә лә күпселек уҡытыусылар баланың күңел донъяһына бик үтеп инергә тырышмай, дәрескә йөрөп, тейешле программаны үҙләштерһә, шул еткән, тип ҡарай. Башҡортостанда ла балалар һәм үҫмерҙәр араһында суицид проблемаһы киҫкен тора, үҙ-үҙенә ҡул һалыу осраҡтары айырыуса яҙ айҙарында күҙәтелә. Үҫмерҙәрҙе үҙ ғүмерен ҡыйырға йыш ҡына ата-әсәһе, туғандары һәм тиҫтерҙәре менән үҙ-ара низағтар, яуапһыҙ мөхәббәт, яңғыҙлыҡ этәрә, йәнә быңдай күренештең кемдәндер үс алыу, үкенергә мәжбүр итеү маҡсатында ла булыуы мөмкин.

Әле яңыраҡ ҡына республиканың Шишмә районында булған үҙ-үҙенә ҡул һалырға маташыу осрағына туҡталып китәйек. Апрель баштарында район дауаханаһына 15 йәшлек Лена исемле ҡыҙҙы (исеме үҙгәртеп алынды) килтерәләр. Лененың әсәһе былай ти: "Кискеһен бөтәбеҙ ҙә өйҙә инек. Ҡыҙыма ике әхирәте килеп, тышта йөрөргә саҡырҙы. Бер аҙ ваҡыт үткәс, Лена күңелһеҙ генә өйгә ҡайтып керҙе. Нимә булды, тигән һорауға, тыштағы эскәмйәгә сығып ултырып торам, тине. Сәғәт ярымдан һуң уны тиҙ ярҙам машинаһы дауаханаға килтергән".

Үҙ-үҙенә ҡул һалырға маташыу сәбәбен Лена былай тип аңлата. "Бергә уҡыған өс синыфташ ҡыҙ гел генә мине мыҫҡыл итәләр, ауыр һүҙҙәр әйтеп, күңелемде яралайҙар. Баштараҡ ҡаршылыҡ күрһәтеп ҡараһам да, аҙаҡ, ҡул һелтәп, бер ни өндәшмәҫ булдым. Барыбер уңайы сыҡкан һайын улар мине кәмһетеүҙән туҡтаманы. Апрель баштарында тышта йөрөгәндә былар ҡаршыма тап булды. Тағы мыҫҡыллы һүҙ әйттеләр, ҡысҡырып көлдөләр. Ахыр сиктә түҙмәнем, йылға буйына барҙым да, курткамды сисеп, һыуға ырғыным. Тик йылғанан ике егет тартып сығарҙы".

Ә бит уйлап ҡараһаң, барыһы ла ябай ғына һүҙгә килешеүҙән килеп сыҡкан. Теге ҡыҙҙарҙың береһе Лененың итеген күреп, уны оҡшатмауы хаҡында белдерә. Башҡалары ла уға ҡушылып көлөргә тотона, ә Лена өйөнә ҡайтып китә. Эскәмйәлә бер аҙ ултырғас, батып үлер өсөн йылғаға йүнәлә. Ә бит Лена һис тә ауыр холоҡло ҡыҙ һаналмай, яҡшы уҡый, шиғыр яҙа, китап уҡырға ярата. Дөрөҫ, уй-фекерҙәрен кешегә, әхирәттәренә бик һөйләп бармай, һәр кем үҙ проблемаһын үҙе хәл итергә тейеш тип һанай.

Ярай, Лена менән булған хәл ошолай тамамланһа, Яңауылдағы үҫмерҙәр араһындағы суицидтар теҙмәһе барыһын да шаҡ ҡатырҙы. Тәүге осраҡ бында 30 ғинуарҙа теркәлә. 14 йәшлек Алһыу үҙенең бүлмәһендә аҫылына, атаһы был ваҡытта ашарға әҙерләп йөрөгән була. Ҡыҙыкай әхирәтенә "аська"ла ата-әсәһе менән башҡа йәшәгеһе килмәүен, уларҙың иғтибарҙы күберәк бәләкәй ҡустыһына бүлеүе хаҡында яҙған була. Икенсе осраҡ – Данил исемле үҫмер үҙ үлемендә уҡытыусыһын ғәйепләүе тураһында хушлашыу запискаһы яҙып ҡалдыра. "Атай, әсәй, туғандарым!" Мин үлгәнгә ҡайғырмағыҙ. Өсөнсө сиректә мин тырыштым, әммә яуыҙ ҡатын "икеле" сығарҙы. Мин һеҙгә үндай килеш кәрәкмәйем. Мин – һарайҙа". Малайҙың ни өсөн был аҙымға барыуы һаман асыҡланмаған. Берәүҙәр ата-әсәһен ғәйепләһә, икенселәр уҡытыусыларҙы ғәйепләй. Апрелдә иһә ваҡытлы матбуғатта Галина исемле 16 йәшлек ҡыҙҙың, үҙе йәшәгән йорттоң ҡыйығына менеп, башын элмәккә тығыуы хаҡында мәғлүмәт баҫылды. Дүртенсе синыфтан Галина биология, химия фәндәрен

# Йәшәгеҙ һеҙ, балалар!

тәрәнәйтеп өйрәнә, киләсәктә теш табибы булырға хыяллана. Әсәһе ҡыҙы төплө белем алһын өсөн хатта репетиторҙар ҙа яллай. Йәшәй ҙә башламаған сәскәләй ҡыҙҙың ғүмере өҙөләүгә нимә сәбәпсе – әлегә анык ҡына яуап юҡ.

Ни өсөн балалар үҙ теләге менән донъянан китә һуң? Күп осраҡта улар суицид бөтә проблемаларҙан ҡотолорға ярҙам итә тип уйлай, үҙҙәрен йәлләтергә теләй. Йыш ҡына кемдәндер үс алыу тойғоһо ла тынғылыҡ бирмәҫкә мөмкин. “Бына мин үләсәкмен дә, атай-әсәйем эй үкенәсәк, ғазапланасаҡ” тип уйлай улар. Суицид ҡылыусы балалар йәшәүҙең ҡәҙерен белеп етмәй, үлгәндән һуң был донъяға кире ҡайтып булмаҫын аңламай.

Кешенең үҙ-үҙенә ҡул һалыуы кеүек күренештәр әлек-әлектән, хатта боронғо замандарҙан билдәле. Ислам диненә табыныусылар өсөн иң изгеләрҙән булған Ҡөрьән Кәрим дә был аҙымдың ҙур гонаһ тип һаналыуы хаҡында юкка ғына яҙылмаған. Беҙҙең халыкта, элгәре ундай юл менән үлгәндәрҙе зыяратка ерләргә рөхсәт итмәгәндәр. Ләкин XX быуатта атеизм сәскә атыу сәбәпле, был аҙым тыйылыуҙан туҡтап, хатта һуңғы 15 йыл эсендә суицидҡа мода башланды, тиһәк тә яңылышмабыҙ. Виктор Цой, Игорь Сорин кеүек йырсылар үлгәндән һуң, фанаттары араһынан әленән-әле үҙ-үҙенә ҡул һалыуы тураһында үҙәк баҫмаларҙа уҡырға йә телевидениеның төрлө каналдарында барған тапшырыуҙарында ишетергә тура килде. Хәҙерге ваҡытта тормошобоҙға көндән-көн нығырак үтеп ингән интернет та шомландырмай ҡалмай. Сөнки унда үҙ-үҙенә ҡул һалыу ысулдары хаҡында сайттар, суицид ҡорбаны булырға теләүселәрҙең виртуаль клубтары бар. Эмо, гот кеүек субкультура хәрәкәте ағзалары араһынан да якты донъяны ҡалдырыусылар юҡ түгел. Әйткәндәй, беҙ улар хаҡында былтыр декабрь һанында яҙып сыҡҡайныҡ инде.

Үҫмерҙе үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙан аралап ҡалырға буламы? Була. Бары тик ваҡытында иғтибар бирергә кәрәк. Нindәйҙер проблемаға тарып, унан сығыу юлын тапмаһағыҙ, махсус белгестәргә мөрәжәғәт итегеҙ. Әгәр психолог менән күҙгә-күҙ ҡарап аралашыуҙан тартынһағыҙ, баш ҡалабыҙҙа эшләгән ышаныс телефондарына шылтыратырға мөмкин. Ғаиләгә, йәштәргә һәм балаларға социаль-психологик ярҙам күрһәтеү республика үҙәге. Тел.(347) 276-56-12. Ышаныс телефоны: 8(347) 273-09-00; “Индиго” психологик-медик-социаль ҡала үҙәге. Тел. (347) 223-44-49. Ышаныс телефоны (347) 223-22-11.

## Ата-әсәләргә кәңәштәр

Балағыҙҙы нисек бар, шулай яратығыҙ. Ул һеҙҙең яратыуығыҙҙы һәр саҡ тойорға тейеш.

Көн һайын 10-15 минут ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ. Ныҡ арыһағыҙ ҙа, уй-хыялдары, ҡараштары менән ҡыҙыҡһынығыҙ, балаға дуҫ булырға тырышығыҙ.

Гел генә баланы әрләп тороу унда үҙ-үҙенә ышаныс тойғоһон тәрбиәләмәй. Үҙ-үҙенә ышанған кеше генә тормошта осраған ауырлыҡтарҙы еңеп сыға, яңы үрҙәргә ирешә.

Киләсәккә хыялдарҙы бергәләп ҡорорға тырышығыҙ, уның кәңәштәренә лә ҡолаҡ һалығыҙ.

Тормошта йыш осраған ҡатмарлы хәлдәрҙән сығыу юлдарын өйрәтегеҙ. Йәш саҡта ҡыйынлыҡтарҙы нисек еңеүегеҙ хаҡында һөйләгеҙ, күпме һынауҙар кисереп тә бирешмәгән, рухы һынмаған оптимист кешеләрҙе миҫалға килтерергә онотмағыҙ.

**Нурия ӘХТӘМОВА.**



## Әйткәндәй

**Һуңғы йылдарҙа республикала балалар араһындағы суицид осраҡтары кәмей төшкәйне. Мәҫәлән, 2003 йылда бөтәһе 95 суицид ҡылынған булһа, 2009 йылда 65 осраҡ теркәлгәйне. Ҡыҙғаныска ҡаршы, 2010 йылдың башында балаларҙың үҙ-үҙенә ҡул һалыуы ҡапыл артты – тәүге дүрт ай эсендә 29 үҫмер үҙ теләге менән донъяны ҡалдырған. Был, былтырғы йылдың ошо ваҡыт арауығы менән сағыштырғанда, 11 кешегә күберәк.**

# СВЕРДЛОВСК һӘМ ҠУРҒАН ӨЛКӘЛӘРЕ

## Ҡурған башҡорттары



Ҡасандыр Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ райондары менән бергә Оло Башҡортостандың Ялан Ҡатай кантонына ҡараған, хәҙерге Ҡурған өлкәһенең Әлмән, Сафакүл районларында Ялан ҡатай ырыуы башҡорттары бик борондан көн иткән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, совет осоронда алып барылған сәйәсәт арҡаһында, улар Башҡортостандан да, күрше ҡәрҙәштәренән дә сиктәр менән айырып ҡуйылған. Әле Сафакүл районының – 14, Әлмән районының 13 ауылында 15 меңдән ашыу башҡорт йәшәй.

Ҡурғанда башҡорттарҙың өлкә ҡоролтайы эшләй, Башҡортостан менән мәҙәниәт һәм мәғрифәт өлкәһендә тығыҙ бәйләнештәр булдырылған. Башҡортостанға автономия яулауҙа әүҙем ҡатнашҡан яугир, аҙаҡтан Венгрияла һәм Германияла этнография һәм иҡтисад буйынса ғалим дәрәжәһенә еткән Ғәлимйән Таған Әлмән районының Тәңреғол ауылында тыуған.




## Свердловск башҡорттары

Хәҙерге Свердловск өлкәһенең көньяҡ өлөшө Өпәй, Һыҙғы, Ҡошсо, Терһәк ырыуы башҡорттарының аҫаба ерҙәре булған. Мәскәү тарафынан Кама буйын колонизациялау башланғас, был яҡҡа Ғәйнә ырыуы башҡорттары ла күсенә башлай. Унан һуң күпләп татарҙарҙың күсеүе күҙәтелә. Ләкин колонизациялау был яҡтарға ла килеп етә һәм рус крепостнойҙары килтерелә башлай. Ерҙәрен тартып алыуға, завод-кәлгәләр төҙәүгә ҡаршы был яҡ башҡорттары аяуһыҙ яуҙарға өҙлөкһөҙ күтәрелеп тора. Тап шуның өсөн Свердловск өлкәһенең Красноуфимск ҡалаһында Салауат Юлаевҡа һәйкәл бар. Өфө йылғаһында ултырған Красноуфимск кәлгәһен Ҡыҙылъяр тигән башҡорт ауылы урынында 1734 йылда полковник Тәфтиләү һала.

2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, был тирәлә 37 меңдән ашыу башҡорт йәшәгән (1989 йылда – 41 мең). Элегерәк үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыуҙарҙа Өфө-Шиғыр, Урмәкәй, Арты-Шиғыр, Аҙғол, Аҡбаш, Араҡай, Шәкүр, Рахманғол, Биш, Битке, Ғәйнә, Үрге Баяҡ, Һыҙғы, Табанлыҡүл ауылдары халҡы аҫаба башҡорттар тип яҙылған. Артабан был ауылдар халҡы татарға әйләндерелә.

Свердловск өлкәһендә Башҡортостан республикаһының рәсми вәкиллеге бар, өлкә башҡорттары ҡоролтайы эшләй. Әммә бүлгеләү һаман да дауам итә, тиергә мөмкин: хәҙер Башҡортостан Волга буйы федераль округына ҡарай, ә Свердловск өлкәһе башҡорттары Урал федераль округында тороп ҡалды.

«Хоҙай үҙе кыҙығыр...» Ш. Бабич

16 июнь – башҡорт халҡының батыр улы Салауат Юлаевтың тыуған көнө

# САЛАУАТТА – САЛАУАТТАР



1948 йылда беренсе ҡаҙығы ҡағылып, Юрматы ырыуы башҡорттарының ете ауылы (Оло һәм Бәләкәй Аллағыуат, Ҡарлыкүл, Ирек, Ҡыҙыл ауыл, Күс һәм Ҡужаҡ ауылдары) урынлашҡан ерҙә йылдам ҡалҡып сыҡҡан һәм 1954 йылда ҡала статусын алған Салауаттың уртаһында тора был скульптура. Ленинград скульпторы һәм архитекторы А. Семченко менән Ю. Бриллиантов милли батырыбыҙҙың өс метрлыҡ һыбайлы һынын баҡырҙан ҡойған һәм ҡыйғыр шоңҡар осошо фонында ҡулдарын ҡолас йәйеп алға саҡырған килеш сағылдырған. 12 метр бейеклектәге стела ҡалаға төньяҡтан килеп кергән юлда, ҙур майҙан уртаһында барыһын да сәләм биреп ҡаршылай.

Салауатта шулай уҡ Тамара Нечаеваның барыһына ла таныш бюсы ла бар **(аҫтағы фото)**.






## Салауат

### Ҡобайыр

Һай, Салауат, Салауат,
Юлай улы Салауат!
Батырҙарҙың батыры,
Илем күрке Салауат!
Йүрүҙәндең ярында
Бәләкәйҙән үҫкәнһең,
Толпарҙай етеҙ булып,
Ыласындай осҡанһың,
Башҡорт намыҫын яҡлап,
Күпме яуға сапҡанһың,
Дошмандарҙы ҡыйратып,
Даныңа илде күмеп,
Моңло ҡурайҙа уйнап,
Айҙай уйға батҡанһың.
Иле өсөн йәшәгән –
Урал улы Салауат!
Башҡорт улы – Салауат!
Һиңә – халҡым рәхмәте,
Һиңә – илем хөрмәте!
Башҡорттарҙың яугиры –
Ярһып торған йөрәкле!
Халҡы өсөн, ирек өсөн
Дошман ҡанын ул ҡойған.
Башҡорт халҡы күңелендә
Мәңге үлмәҫ дан ҡалған.
Әй, Салауат, яугирлығың
Күптәргә ҡуйыр ҡанат,
Йөрәктәрҙә һинең рухың
Мәңге йәшәр, Салауат!
Мәңге йәшәр, Салауат!

**Эльвина Ҡыямова.**
**Аҫҡын районының**
**Ҡарткиҫәк мәктәбе**
**уҡыусыһы.**



„АМАНАТ" журналы

2010




АРҒЫМАК









## Kia Magentis

Корея фирмаһының иң һуңғы ҡаҙанышы булған Киа Мажентис автомобиле күптәрҙе хайран итә. Ул үҙенең “туғандарынан” саҡ ҡына оҙонораҡ, киңерәк һәм тәпәшерәк. Иркенерәк булып киткән был машина замана техникаһына хас барлыҡ кәрәк-яраҡ менән дә йыһазландырылған.

Корея машинаһы тигән исеме ҡалһа ла, уны эшләүҙә Швеция, АҠШ белгестәре ҡатнашҡан. Ҡайһы илдә һатылыуына ҡарап, двигателе лә бензин йә дизел менән эшләүе мөмкин, йыһазландырылыуы ла төрлөсә, хатта төрлө илдәрҙә төрлө исем менән йөрөй ул. Шуға уның баҙар хаҡының 800 мең һумдан да артып китеүе ихтимал.

# «Аманат» коллекцияһы



## Ми-28 “Төнгө һунарсы»

Мәскәү заводында сығарылған һәм 1996 йылда беренсе тапҡыр һауаға күтәрелгән был “һунарсы” ҡоро ер ғәскәрҙәренә һауанан ярҙам итер өсөн тәғәйенләнгән. 3600 метр бейеклектә сәғәтенә 305 саҡырым тиҙлектә 450 саҡырымға тиклем оса алған был машинаның экипажы ике кешенән тора. Кәрәк булғанда артҡы кабинала тағы ла 2-3 кеше ташый ала. Оҙонлоғо 7 метр, винттары оҙонлоғо 17 метрлыҡ был вертолет 10 тоннанан ашыу ауырлыҡта. Уның техник мөмкинлектәре һәм ҡоралдары АҠШ-тың “Апач” вертолетынан өҫтөнөрәк һанала.








# ТАНЫШ БУЛЫҒЫҘ: “АРҒЫМАҠ”!

**А** – аң,
**Р** – рух,
**Ғ** – ғәм,
**Ы** – ырыҫ,
**М** – моң,
**А** – аҡыл,
**Ҡ** – ҡот

Шағирә Мәрйәм Күсмәева арғымаҡ һүҙен ошолай аңлата. Ысынлап та, төркөмдәренә ошо исемде алған был йәштәргә тап шул сифаттар хас: моңло ла, рухлы ла, ғәмле лә, аҡыллы ла үҙҙәре. Башҡорт эстрадаһындағы этно-рок йүнәлешендә ижад иткән яңы йондоҙ – “Арғымаҡ” төркөмө тураһында һүҙебеҙ.

**Төркөмдөң составы:**

**Ринат Рамаҙанов** – ҡурай; композитор, төркөмдөң художество етәксеһе;

**Марсель Әмәкәсов** – гитара;

**Лиана Латыпова** – ҡыл-ҡумыҙ;

**Марсель Абзанов** – ҡурай, өҙләү;

Барыһы ла З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһында, башҡорт музыкаһы факультетында белем ала.

**Алик Гәрәев** – һуҡма ҡоралдар; Өфө сәнғәт училищеһы студенты.

**Рәил Аллаяров** (бас-гитара) менән төркөм продюсеры **Зөлфәр Әхмәтов** та ошо уҡыу йортон тамамлаған.

## Төркөмдөң барлыҡҡа килеүе

Ринат Рамаҙанов Стәрлетамаҡ филармонияһында эшләгәндә дуҫы Илдар Нагаев менән үҙҙәренең төркөмөн булдыра. Өфөгә сәнғәт академияһына уҡырға ингәс, элеккеһе һымаҡ төркөм төҙөү тураһында хыяллана. Музыканттар эҙләй башлай. Тап ошо ваҡытта Салауат музыка училищеһында бергә уҡыған һабаҡташы Илгиз Сабиров Ринатты Зөлфәр Әхмәтов менән таныштыра. Зөлфәр Әхмәтов – продюсер, Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры ла. Ул да электән үк милли үҙенсәлекле этно (халыҡсан) төркөм төҙөү теләге менән янып йөрөгән. Икәүләп һөйләшеп, этно-рок йүнәлешендә сығыш яһаған коллектив йыйырға килешәләр. Ринат был эшкә курсташтарын йәлеп итә.

## Киләсәккә пландары

Әлеге ваҡытта төркөмдөң үҙ студияһы булмаһа ла, бирешмәй, дәртләнеп ижад итә. “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосынан “Балҡантау” йыры, “Йәйәүле Мәхмүт”, “Дәләү Ғәйшә” кеүек халыҡ көйҙәрен һәм үҙҙәре яҙған йырҙарын да халыҡ инструменттарында, өҙләү ҡушып үҙенсәлекле итеп башҡаралар. Әле репертуарҙы байытыу, соло-концертҡа, тәүге альбом сығарыуға әҙерлек бара.

## Ҡаҙаныштары

“Арғымаҡ” төркөмө “Ҡышҡы йәйғор” беренсе башҡорт рок фестивалендә ҡатнаша. Өфөнөң төрлө сәхнәләрендә – Нефтселәр мәҙәниәт һарайында, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында, “Өфө уттары”, “Дүшәмбе” клубтарында, “Иҙел” бистроһында сығыш яһай. “Йәшлек-шоу – 2010” конкурс-фестивалендә ҡатнашып, “Йыл асышы” номинацияһында еңеү яуланы.

**Эльвира ИСҠУЖИНА әҙерләне.**




«Шәп малай» конкурсының май айының еңеүселәре тип дөрөҫ яуаптарҙы беренсе булып ебәргән

**Илеш районының Ишкар ауылынан Илфат Саҙретдиновты, Бүздәк районының Ҡаңны-Төркәй ауылынан Гөлназ Әхмәтованы** һәм **Мәләүез районының Ҡотош ауылынан Булат Алтынсуринды** иғлан итәбеҙ.

Афарин!

**Дөрөҫ яуаптар (№05-2010)**

1. Эквадор
2. Исландия
3. Ҡаҙағстан
4. Кувейт
5. Ливан
6. Малайзия
7. Панама
8. Сьерра-Леоне
9. Судан
10. Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре

Ә был флагтарҙың ҡайһы илдәрҙеке икәнен, йә, кем беренсе белер һәм хәбәр итеп өлгөрөр – шул еңеүсе!

Һеҙҙән хаттар һәм телефон аша хәбәрҙәр көтәбеҙ!

СМС-хәбәр ебәрер өсөн кеҫә телефонынан 3443 номерын һәм «Малай» префиксын йыйырға кәрәк.




Префикс: “Малай”



# Урмандың йәшел уттары






Йәйге урмандың әкиәти бер мөғжизәһе – баҙлауыҡтар. Йәйҙең башында, ҡараңғы төшкәс тә, урман һәм аҡландарҙа алыҫтан йәшкелт осҡон булып балҡып, серле уттар тоҡана. Бәләкәй саҡта беҙ уларҙы йыйып ала ла, төрлөсә ҡыландыра торғайныҡ: баҙлауыҡ уттарҙан төн эсендә балҡып ятҡан яҙыу теҙеп ҡуяһыңмы, кейемеңдең төрлө ерҙәренә ҡуйып, үҙеңдән “сит планета кешеһе” яһайһыңмы...

Тәбиғәттә баҙлауыҡтарҙың ике төрө бар: бәшмәктәр һәм ҡуңыҙҙар. Бар донъя буйлап уларҙың бихисап төрҙәре йәшәй. Беҙҙә киң таралған бәшмәктәрҙән – ғәҙәти баллыҡай (опенок) балҡый белә. Башҡа бәшмәктәрҙән айырмалы, уның эшләпәһе йә һабағы түгел, ә беҙ тамыры тип ҡабул итеп өйрәнгән (бәшмәктәрҙең тамыры булмауын беләһегеҙҙер) өлөшө – мицелий фосфорлы яҡтылыҡ бирә. Уныһы ер аҫтында булғанлыҡтан, яныуы күренеп бармай. Ләкин баллыҡайҙар күпселектә серек ағастарҙы төйәк итеүсән, шунлыҡтан уның мицелийы һырып алған ағас төпһәләре, йығылып ятҡан олондар йылы йәйге төндәрҙә тоноҡ йәшкелт яҡтылыҡ һирпеп ултыра. Шуға халыҡ араһында ла яҡтылыҡ сығанағы булған ағас төптәре образы киң таралған. Ә бына йылы яҡтарҙа үҫеүсе ҡайһы бер бәшмәктәрҙең эшләпәһе аҫтынан да ут һирпелә (һүрәттә).

Халыҡ баҙлауыҡ тип йөрөткән, йәйге кистәрҙә йәшкелт тоноҡ яҡтылыҡ бөркөп ятҡан йән эйәһе – ябай ҡуңыҙ (Иванов червячок). Уның атаһы бер сантиметр самаһы оҙонлоҡтағы һоро төҫтәге ҡуңыҙ, ә инәһе – тиреҫ ҡортон хәтерләтә. Атаһы һирәкләп оса, әммә уның яҡтырткыс биҙе ҡанат аҫтында урынлашҡан, шуға өҫтән ҡарағанда күренмәй. Урманда баҙлауыҡ күреп ҡалып, үлән араһынан барып тапһағыҙ, ул ҡорт инә баҙлауыҡ буласаҡ. Фосфорлы арт яғы тирә-яҡҡа нурҙар сәсеп, туйҙар мәлендә бер-береһен саҡырыусы ролен үтәй. Уларҙың фонаре ярайһы уҡ камил: ябай электр лампаһы 5 процент ҡына энергияны яҡтылыҡ һибергә тотона, ә ҡуңыҙҙар – 98 процентын. Йылына һәм урынына ҡарап уларҙың бик күп үрсеп китеүе һәм төнгө урманды сихри бер һарай итеп биҙәүе ихтимал.





Яҡтылыҡ биреүсе бәшмәктәр һәм ҡуңыҙҙар – беҙҙең яҡ урмандарының мөғжизәле күренеше. Шулай ҙа уларҙы күргән кешеләрҙе миңә һирәк осратырға тура килде. Минең дә тик малай саҡ хәтирәләремдә генә ҡалған улар. Был, күрәһең, күпселек кешенең урманға төндә йөрөмәүенә бәйлелер. Шулай ҙа йәйге походтарға йөрөгәндә төнгө усаҡ янынан китеп, урман ҡараңғылығына һәм серле тауыштар донъяһына сумып ҡарағыҙ. Бер аҙ тора биргәс, әллә ҡайҙан емелдәгән йәшкелт утсыҡтар һеҙҙе үҙенә әйҙәй башлар.













# ТӨНЬЯҠ БАШҠОРТТАРЫ




Төньяҡ башҡорттары иҫәбенә Ғәйнә, Танып, Ун, Балыҡсы һәм Уран ырыуҙары инә. Төньяҡ башҡорт ырыуҙары Каманың ҡушылдыҡтары Түлвә, Беүә, Танып һәм Ҡариҙелдең урта ағымында ярайһы уҡ ойошоп ултырған. Улар Сарс, Төй һәм Йүрүҙән буйҙарында ла йәшәй. Был төбәк XIX быуат аҙағына тулыһынса формалашҡан. Бынан алдағы осорҙа башҡорт ерҙәренең төньяҡ сиге киңерәк тә булырға тейеш.

Балыҡсы ырыуы Төй һәм Сарс йылғалары буйында уларҙың Ҡариҙелгә ҡойған урынына тиклем йәшәгән. Көньяҡтан уларҙың күршеһе ундар булған. Таныптар иһә көнсығышҡа Танып буйына тик 1715 йылдарҙа ғына күсенгән. Ундар XVI – XVII быуаттарҙа Ҡариҙел менән Ағиҙелдең түбәнге ағымында байтаҡ ҡына урын биләгән. Ләкин һуңынан был төбәк бер нисә өлөшкә бүленгән: ундарҙың бер өлөшө Танып буйында ҡалған, байтағы көнсығышҡа, Ҡариҙел буйына күсенгән. Һуңынан улар Йүрүҙәндең түбәнге ағымын да биләгән.

Таныптар ике ырыуҙан тора: Һыу-Танып йәки Һул-Танып һәм Ҡара-Танып. Таныптарға ҡаҙансы һәм ҡайпандар үҙаллы ырыу булып ингән. Улар был ырыуға ҡыпсаҡ осоронда килеп ҡушылған булырға тейеш. Таныптарҙың ата-бабалары был төбәккә Минзәлә яғынан килгән. Академик Р. Кузеевтың фекеренсә, таныптар төньяҡҡа болғар-уғыр ырыуҙары менән аралашҡас, башҡорттарҙың күсмә ырыуы менән үтеп ингән. Был XII – XIII быуаттарҙа булған. Минзәлә яғынан сыҡҡан ғәйнәләр таныптарҙы үҙҙәренең туғаны тип иҫәпләй.

Этнографик белешмәләр буйынса, таныптарҙың ерле халыҡ менән аралашыуын да күрергә мөмкин. Танып башҡорттарының ерле фин-уғыр ырыуҙары менән аралашыуы ярайһы уҡ киң барған. Уларҙың теле һәм мәҙәниәте аралашҡан, хатта уларҙың тышҡы ҡиәфәттәрендә лә оҡшашлыҡ һаҡланған. Тышҡы йөҙө буйынса улар Волга буйы халыҡтарына, мариҙарға, мордваларға, удмурттарға оҡшаған.

Ҡаҙансы һәм Ҡайпан ырыуҙарының Башҡортостандың төньяғына күсенеп ултырыуы шулай уҡ ҡыпсаҡ миграцияһы менән тығыҙ бәйләнгән. Әйткәндәй, ҡаҙансы этнонимы Урта Азияла ла киң таралған. Ҡаҙансыларҙың боронғо төрөктәрҙән сығыуы хаҡында уларҙың кейеме лә һөйләй һымаҡ. Төрки халыҡтарындағы кеүек уҡ, уларҙың күкрәксәләрендәге биҙәү әйберҙәре тукы-

маға нигеҙләнгән, ә яулыктарҙың дөйөм күренеше төркиҙәрҙеке кеүек.

Ҡайпан этнонимы иһә көньяҡ-көнсығыш боронғо башҡорт ырыуҙары составында осрай. Генетик яҡтан ҡайпандарҙың ҡай ырыуы менән бәйле булыуы хаҡындағы фекер нигеҙле һымаҡ, был исем ҡыпсаҡ ырыуында осрай. Әйтергә кәрәк, ҡаҙансы һәм ҡайпандар таныптарға тик ерле мөнәсәбәттә генә. Улар танып ерҙәренә XV быуатта ғына күсеп килгән.

Ун ырыуы төньяҡҡа күсенгәнгә тиклем Ағиҙел буйҙарында йәшәгән. Бында уларҙың күршеһе Табын ырыуы булған. XVI быуатта Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыу был күршелекте боҙған. Һөҙөмтәлә унҙарҙың бер өлөшө Ағиҙел буйында ҡалған. Ағиҙел башҡорттары хаҡында һөйләгәндә Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, бишул-унғарҙарҙы ерле башҡорттар һун башҡорттары тип йөрөткән, тип яҙған. Тарихта һундарҙы төрки ҡәбиләләрҙең ҡушылмаһы тип йөрөтәләр. Һундар составына төрки телле ҡәбиләләр ингән, уларҙы он-уйғыр тип атағандар. Р. Кузеевтың фекеренсә, ун этнонимы һундар заманына барып тоташа. Ундарҙың ата-бабалары бик иртә башҡорт миграцияһы составына ингән һәм боронғо башҡорт ҡәбиләләренән Урал буйҙарына дөйөм күсенеү мәлендә айырылған.

Балыҡсы ырыуының тамғаһы боронғо ҡатай тамғаһы – балғаға бик оҡшаған. Асҡын районында, мәҫәлән, миңә балыҡсылар менән ҡатайҙарҙың туғанлыҡтары хаҡында ҡарттар ышандырырлыҡ итеп һөйләгәйне. Ысынлап та, уларҙың һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар. Асҡын башҡорттарының һөйләшеү теленә Инйәр ҡатайҙарына оҡшаған фонетик үҙенсәлектәр бик хас. Балыҡсы этнонимы үҙенсә бер тикшереүҙе талап итә. Халыҡтарҙа быңдай миҫалдар бар. Әйтәйек, “ҡаҙаҡ” һүҙен йыш ҡына “ҡаҙ+аҡ” ҡушылыуы менән аңлаталар. Ысынлап иһә был иҫке төрки сығанаҡтары буйынса “ирекле”, “дала” кешеләре тигәндә аңлата.

Балыҡсы этнонимына килгәндә иһә, беҙҙеңсә, Р. Кузеевтың аңлатыуы хаҡлыҡҡа дәғүә итә ала кеүек. Уныңса, XVIII – IX быуаттарҙағы боронғо төрки яҙмаларында “балуг”, “балук” ҡала мәғәнәһендә йөрөй. Ете һыу тирәһендә ҡара ҡатайҙарҙың, унан һуң уйғырҙарҙың – Джамбалыҡ, Бешбалыҡ, ҡаҙаҡтарҙың Арыкбалыҡ исемле ҡалалары булған. Балыҡсы этнонимы ҡырғыҙҙарҙа ла, төрөкмәндәрҙә ла, тываларҙа ла осрай. Былар барыһы ла балыҡсы һүҙенең боронғо төрки сығанаҡлы булыуы хаҡында һөйләй. Күрәһең, балыҡсылар боронғо ҡала халҡының күсенеп йөрөүсе өлөшөн тәшкил иткән, улар ниндәйҙер иҡтисади һәм сәйәси шарттарҙа был ҡалаларҙы һаҡлаған.

Балыҡсыларҙың ата-бабалары Алтайҙа һәм Көньяҡ Себерҙә, ҡатайҙар менән бергә йәки улар менән йәнәш йәшәгән. Халыҡтарҙың бөйөк күсенеү мәлендә балыҡсылар ҙа ситтә ҡалмаған. Улар ҡатайҙар менән бергә Урал буйына күсенгән. Тәүҙә улар Яйыҡҡа килеп сыҡҡан, һуңынан – Ыҡ буйына. XII–XIV быуаттарҙа ҡатайҙар менән бергә хәрәкәт иткән. Артабан улар ҡатайҙарҙан айырылған һәм Танып буйлап төньяҡҡа күсенгән, Төй үҙәнендәге урмандарҙа нигеҙләнгән. Бында болғар сығышлы боронғо башҡорттар менән ныҡ аралашыуҙарына ҡарамаҫтан, балыҡсылар быуаттар буйына үҙҙәренең кейем-һалымында, төҙөлөштә, ашһыуында ырыуҙарына хас сифаттарҙы бөгөнгө көнгә тиклем һаҡлаған.

Уран ырыуының ата-бабалары монгол һәм төрки-монгол ҡәбиләләренән сыҡҡан, көнбайышҡа күсенгәндә улар Һырдаръя далаларында һәм Арал буйында оҙаҡ ҡына йәшәгән. Һөҙөмтәлә улар ныҡ төркиләшкән. Боронғо башҡорт ҡәбиләләренең бер өлөшө артабан көнбайышҡа күсенгәс, урандар бер нисә йөҙ йыл буйына Азия далаларында ҡалған.

Арал буйында йәшәгән мәлдә урандарға уғыҙҙар айырыуса ныҡ йоғонто яһаған. Әле лә башҡорттарҙа уғыҙ исемдәре осрай. Мәҫәлән, әле лә Үгеҙ ауылдары бар. Урандарҙың бүленеүе һәм төрлө яҡҡа күсенеүе уғыҙҙарҙың Һырдарьянан көньяҡ-көнбайышҡа күсенеүе арҡаһында барлыҡҡа килгән. Һырдаръя буйында ҡалған урандар хаҡында XII –XVII быуаттарҙағы көнсығыш сығанаҡтарҙа иҫкә алына.

Урандарҙың Башҡортостанға нисек күсенеүе хаҡында мәғлүмәттәр юҡ тиерлек. Тик телдән-телгә күсеп килгән мәғлүмәттәр буйынса, урандар Башҡортостандың көньяғына килеп ингән, унан Мейәс буйлап күсенгән һәм Ағиҙел үҙәненә килеп сыҡҡан. Уларҙың шундай ҡатмарлы маршрут буйынса күсенеүе, күрәһең, дөрөҫтөр. Башҡортостандың көньяғындағы Һаҡмар йылғаһының Оло һәм Кесе Уран ҡушылдыҡтары бар. Урал аръяғында иһә Мейәстән йыраҡ түгел ике күлде башҡорттар “Уранғы”, “Уранғыс” тип атай. Нисек кенә булмаһын, халыҡ ошо төбәктә ныҡлап урын алған.

**Рим ЙӘНҒУЖИН,**
**тарих фәндәре докторы,**
**профессор.**

Ай, һылыу!

# ҺӨТАЙ ҺЫЛЫУЫ

**Мин, Әлиә Хәмиҙуллина, Дәүләкән районының Мәкәш ауылында тыуғанмын. Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика башҡорт гимназия-интернатында белем алам. Бейергә, шиғырҙар яҙырға яратам. Киләсәктә юғары дәрәжәле хоҡуҡ белгесе булырға хыялланам.**





**Азалия Түләшева, Йылайыр районының Ашҡаҙар ауылынан:** “Йырларға, бейергә, һүрәт төшөрөргә яратам. “Серле биҙәктәр” түңәрәгенә йөрөп, мәрйен теҙергә, бәйләргә өйрәнәм, төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урындар яулайым.”



**Дилбәр Ғәйзуллина, Асҡын районының Ҡашҡа ауылынан:** “Бәйләргә, һүрәт төшөрөргә, бешереүҙәргә яратам һәм бейеү түңәрәгенә йөрөйөм. Мәктәптә лә тик яҡшы билдәләргә өлгәшәм. “Аманат” журналын һәр ваҡыт көтөп алам.”



**Әлиә Киленбаева, Өфө ҡалаһынан:** “Иң яратҡан шөғөлөм – бейеү. Киләсәккә хыялым – юғары белем алып, күңелем теләгән һөнәргә эйә булыу.”



**Рушана Билалова, Хәйбулла районының Әбүбәкер ауылынан:** “Исемем нурлы, яҡты, нур һибеүсе тигәнде аңлата. Атай-әсәйемде ҡыуандырып, гел “бишле”гә генә өлгәшәм, бейергә, йырларға, бәйләргә әүәҫмен.”




**Илдус ТИМЕРХАНОВ**

## йәки Бик ҡурҡыныс январ, ә тураһын әйткәндә, – Суртан, бүре һәм ала ҡарға мажаралары

### Әкиәт

Бейек тирәк башындағы оҙон ботаҡта, ус төбөндәгеләй күренеп ятҡан тирә-йүнгә күҙ һалғылап, ҡойроҡ осо китек ала ҡарға Ғилмениса ултыра. Текә тау аҫтында йылы ҡояш нурҙарын сағылдырып йымылдаған Ҡарабәрҙе йылғаһына ла ҡараш ташлай үҙе. Талғын елдә аҡрын ғына шаулаған Бүләк урманына ла ҡарап ала. Аҡбалсыҡ һылап ағартылған ыҡсым йорттары төҙ урам булып теҙелеп киткән бәләкәй генә ауылды ла күҙәтә.

Урманда уның йән дуҫы – уҫал бүре Хәйретдин ғүмер итә. Йылғала яҡын әшнәһе – зәһ-һәр суртан Файзрахман көн күрә. Ҡош үҙе урман ситендәге ағаслыкта оя ҡора. Йән дуҫы менән яҡын әшнәһе был хәстрүш ҡарғаны иптәш-теләктәш тип йөрөтә. Ә ауылда, яр буйындағы бер өйҙә, кескәй ҡыҙ – асыҡ йөҙлө матур Лилиә йәшәй. Әле бына өйҙән балаҫтар сығарып ҡоймаға элде лә баҡсаға инде. Ҙур һауыттан тасҡа йылы һыу алып, иҙән йыуырға кереп китте. Эстә етеҙ генә эшен бөтөрөп, болдорҙо таҙарта башлағас, беләге менән сәстәрен төҙәтте, битен, күҙ тирәһен һөртөп алды.

"Кәйефе юҡ, буғай, илай ҙа, ахырыһы. Бик һәйбәт. күптән көткәйнем был көндө", – тип уйланы, кинәнеп, ала ҡарға.

Нимә булған, тиһегеҙме?

***

Ваҡиға суртан Файзрахмандың ҡорһағы асыуҙан башланды. Тамаҡ туйҙырам тип ваҡ балыҡтарҙы баҫтыра-баҫтыра ҡойроҡтарын да тота алмағас, ҡамыш араһына инеп йәшеренергә булды. Берәй бәрҙе, йәиһә сабаҡ килеп сыҡмаҫмы? Аҡай күҙҙәрен алартып, оҙаҡ ҡына көтөргә тура килде. Бына бәхет йылмайҙы – бер һимеҙ сабаҡ былай табан йөҙөп килә. Көтмәгәндә өҫтөнә ырғыһа, бер ҡайҙа ла китә алмаясаҡ. Киң итеп асылған үткер тешле һоҫҡо ауыҙҙы ша-а-ап итеп ябып, табышты кинәнеп йотаһы ғына ҡала.

Тик һыу өҫтөнә әллә ҡайҙан яҫы таш килеп бәрелде лә, һикерә-һикерә йылға аша китеп барҙы. Арғы яҡ ярға сығып етәм тигәндә йәнә бер һикермәксе булғайны, булдыра алманы – батты ла ҡуйҙы. Оҙон ғына ара үтеп, көсө кәмегәйне шул. Был тиклем ауыр кәүҙәне күтәреү өсөн ай-һай ҙур ҡеүәт кәрәк. Унығы ла йә кеше ҡулы ташты осороп ебәрһә, йә таш үҙе бейектән ысҡынып төшһә генә барлыҡҡа килә. Сабаҡ ҡурҡышынан ҡайҙа барырға белмәйенсә, бер урында өйөрөлөп алды ла, күҙҙән юғалды. Суртандың да ҡото ҡойроҡ осона күсте. Тәүҙә, күҙҙәрен тондороп, ни эшләргә белмәй торҙо. Шунан иҫенә килде лә, ҡойроғон борғолап, ашыға-ашыға ҡамыштарҙың ҡуйыраҡ урынына кереп боҫто. Эштең айышына тиҙ төшөнгәс, өҫкә күтәрелеп, ярға күҙ атты. Һыу ситендә асыҡ йөҙлө матур Лилиә баҫып тора. Иңбашына көйәнтә, уға силәктәр эленгән. Ҡыҙ ҡуҙғалған һайын күңелле итеп шығырлап-сыңлап ҡуялар. Ул бында тәмле һыу алырға килгән. Һалҡын шишмә эргәлә генә. Юлындағы ап-аҡ таштарҙы һыйпап-иркәләп, селтер-селтер ағып ята. Ә ситтәрәк бер малай йәнә таш алып, һыуға ырғытмаҡсы, баяғылай, рәттән өс-дүрт "ҡоймаҡ" яһап, ҡыҙ алдында маҡтанмаҡсы була. Бына кем ғәйепле икән! Тапҡан һыу ташырға ваҡыт! Файзрахман тамаҡ туйҙырырға йөрөгәндә! Шул арала әллә ҡайҙан көмөш ташбаш килеп сыҡмаһынмы! Суртанда ҡыҙ менән малай ҡайғыһы ҡалманы. Ас ҡарынын тултырам тип, күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй ташбашҡа уҡталды. Тегеһе ярға һикерҙе. Суртан уның артынан ташланғайны, лапылдап ҡом өҫтөнә килеп төштө. Төшөү ыңғайына аҫҡа күҙ һалып өлгөрҙө. Ташбаш, йүнһеҙ, тап йылға ситендә, ҡомда, эсенә һыу тулған аяҡ эҙендә йәшеренеп ултыра. Асыҡ йөҙлө матур Лилиә йөрөгәндән уйылып ҡалған тәрән эҙ инде был. Әй, асыуы ҡабарҙы ҡыҙға суртандың. Барып, асыҡ балтырынан тешләп алғыһы килде. Тик ни хәл итәһең, ара йыраҡ ҡына, балыҡ ҡоро ерҙә йөрөй алмай. Дуғалай бөгөлөп, һикергеләй-һикергеләй, көс-хәл менән кире йылғаға төшөүҙән башҡа сараһы ҡалманы.

Тыны ҡыҫылып, бер аҙ һайлыкта ятҡас, йылға ситенә, шишмә һыуы ҡушылған урынға килде. Арыһа, шул шифалы һыуҙы эсеп, хәл ала торғайны. Ни ғәжәп? Йылғаға шишмәнән һыу килмәй ҙә баһа! Ярға күҙ һалды ла: "Йәнә асыҡ йөҙлө



матур Лилиә!" – тип, ҡойроғон ҡомға бәрҙе. Асыуы ҡупһа, шулай итә торғайны ул. Ҡыҙ текә яр аҫтынан бәреп сыҡҡан шишмә тибешенә силәген ҡуйған. Шуға күрә йылғаға һыу төшмәй. Силәктәре тулғас, асыҡ йөҙлө матур Лилиә уларҙы көйәнтәгә элде, иңбашына һалды, һуҡмаҡҡа сыҡты. Аяҡ аҫтындағы ҡуйы ҡоро саңда кескәй эҙҙәр ҡалдырып, тиҙ-тиҙ генә тауға менеп китте. Туп-тулы силәктәренән тамсы ла һыу төшмәне, һуҡмаҡты, уның ситендәге үләнде еүешләмәне. Суртан, миңрәү һарыҡтай аңшайып, ҡыҙ артынан ҡарап торған арала һыу тулған аяҡ эҙенән хәйләкәр ташбаш йылғаға һикерҙе. Тәрән урынға инеп, күҙҙән юғалды. Суртандың быға ныҡ йәне көйҙө. "Үс ҡайтарыу өсөн асыҡ йөҙлө матур Лилиәнең аяғын тешләмәйсә булмаҫ", – тип уйлап ҡуйҙы.

Кискеһен ҡыҙҙарҙың йылға буйына йыйылыуын күреп, улар һыу инә торған урынға йөҙөп килде. Бала-саға аяҡтарын сәпелдәтеп йөҙә, ярҙан һыуға һикерә башлағас, мәшхәр ҡупты. Асыҡ йөҙлө матур Лилиәгә яҡын бармалы түгел. Суртан үсен ҡандыра алманы.

Бер көндө Бүләк урманынан Ҡарабәрҙенең ташлы-ҡомло ярына бүре Хәйретдин килде. Оҙон ҡыҙыл теле менән сәпелдәтә-сәпелдәтә, йәмһеҙ оло ауыҙы тирәһендәге аҡһыл-һоро йөндәрен үтәләй сылатып, бер аҙ һыу эскәс, ял итергә туҡтаны. Суртан Файзрахман уға һүҙ ҡатты:

– Йән дуҫ бүре! Асыҡ йөҙлө матур Лилиә арҡаһында өс көн элек ас ҡалдым. Урманға еләк йыйырға килһә, аяғынан тешлә әле.

– Ярар, яҡын әшнә, – тине бүре. – Шундай ауырттырып тешләрмен, сырылдап ебәреп, бөтә урманды яңғыратыр. Тауышы, шаңдау булып, кәм тигәндә ун биш саҡрым араны урап ҡайтыр. Һин дә йырткыс, мин дә йырткыс. Тимәк, бер-беребеҙҙе ике һүҙҙән аңлайбыҙ. Тештәреңде күрһәм дә һөйөнөп ҡуям бит мин, һине үҙемә оҡшатып. Ярҙам итешеп йәшәйек.

Еләк бешкән ваҡыт ине. Бер саҡ Ҡарабәрҙе ҡыҙҙары урманға килде. Бүре, быны күреп, йылғыр ғына ҡыуаҡ эсенә инеп йәшеренде. Ботаҡ-япраҡтар араһынан, күҙҙәрен ялтыратып, ҡарап ултырғанда яңғырауыҡ тауыш ишетте:

– Лилиә, аҡландың был өлөшө һинеке! Быныһы – минеке! Ҡыҙҙар, һеҙ тегенән йыйырһығыҙ!

Асыҡ йөҙлө матур Лилиәнең һомғол буйлы өлгөр апаһы Әлиә фарман бирә икән. Бөтә кеше бергә буталып йөрөгәнде яратмай ул. Улай йөрөһәң, эш ырамай.

Быны ишетеп, бүре Хәйретдин ҡатып ҡалды. Уның да бит үҙ биләмәләре бар! Башҡа бүреләр кермәһен тағы! Асыҡ йөҙлө матур Лилиәнең аяғын тешләргә кәрәклеген дә онотоп, ҡыуаҡлыҡтан йүгереп сыҡҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

– Ҡыҙҙар, бүре!

Шул арала Хәйретдин ҡуйы үлән араһына кереп шылды.

– Ниндәй бүре булһын! Беҙҙе күргәс, ҡото осоп, ҡасып китте бит! Бүре ҡурҡа тиме ни? Ҡуяндыр ул!

Үҙен ҡуян тип атағандарын ишетеп, бүре Хәйретдин бик оялды. Йә тағы ла оятҡа ҡалырмын тип, башҡаса бында килмәҫкә булды.

Ҡарт ҡайын ботағында ала ҡарға Ғилмениса эшһеҙлектән ҡар-ҡар килеп, үҙ алдына һөйләнеп ултыра ине. "Был урманда ике генә ысын һайрар ҡош бар. Ҡалғандары ҡош исемен йөрөткәнгә генә һөйөнһөндәр", – тип, үҙ бөйөклөгөнә үҙе һоҡланып, бер туҡтауһыҙ ҡабатлай. "Береһе Ғилмениса үҙелер инде. Икенсеһе кем икән?" шул хаҡта уйлап алды ла, бүре уға өндәште:

– Иптәш-teләктәш Ғилменисә-ү-ү-ү! Селтер һыулы йылға исемен йөрөткән Ҡарабәрҙе ауылынан асыҡ йөҙлө матур Лилиәнең аяғын тешлә әле, – тине. – Бөгөн уны ҡыйырһытайым тип йөрөгәндә, уның арҡаһында, оятҡа ҡалдым.

– Ярар, йән дуҫ, – тине Ғилмениса. – Бер-беребеҙҙең һүҙен йыҡмайыҡ. Тик мин тешләй белмәйем. Суҡырмын ғына инде. Тешләгәндән кәм булмаҫ.

Кискеһен, фыр-фыр ҡанат елпеп, бик етди ҡиәфәттә ауылға осоп килде. Асыҡ йөҙлө матур Лилиә баҡсала түтәлдәр араһында йәшел һуған өҙөп йөрөй ине. Ала ҡарға тәүҙә ҡоймаға ҡунды. Яйын тура килтереп, ергә эйелгән ҡыҙҙың аяғына ташландым ғына тигәндә, кемдер ҡойроғонан тотоп алмаһынмы! Ю-у-у-к. Тотмағандар. Ҡойма ярығына ҡыҫылған икән. Ҡарға көслө ел йолҡҡолап һелкеткән сепрәк кеүек бәргеләнде. Ә эсенән: "Бөттө башым!" – тип өҙгөләндө. Ҡапҡанға эләккән ҡошто күреп, баҡса янына ауыл бесәйҙәре йыйылды. Икеһе аҡ, береһе – ҡара, ҡалғандары һоро ине. Үләнгә бер рәт

булып теҙелешеп ултырҙылар ҙа, мырылдашып, янып торған йәшкелт күҙҙәрен ала ҡарғаға төбәнеләр. Өсөһө түҙмәне, ҡоймаға үрмәләп, тәпәйҙәре менән уға үрелде. Тегеһе йәнә сәбәләнә башлағас, шикләнеп, тәпәйҙәрен кире алдылар. Әллә ҡайҙан урам эте Алабай килеп сыҡты. Был тиклем дә күп бесәйҙең бергә йыйылғанын күргәне юҡ ине. Шуға тәүҙә аптырап ҡалды. Хатта шыңшып ҡуйҙы, бахыр. Шунан, тирә-яҡты яңғыратып, бик ҡатыр өрөп ебәрҙе:

– Уау! Уау! Уау!

Ала ҡарға Ғилмениса менән мауығып, эттең килгәнен һиҙмәгән бесәйҙәр, ҡурҡышып, тирәяҡҡа һибелде. Был шау-шыу ҡарғаны тағы ла нығыраҡ ҡурҡытты. Бөтә көсөн йыйып тартылғайны, ҡойроҡ осондағы бер нисә ҡаурый өҙөлөп, ҡапҡандан ҡотолдо. Көс-хәл менән тирәк башына осоп менде. Аҫта урам эте Алабайҙың өрөүе уға һау-һау тип ишетелде. “Һау булырһың бында, ҡойроҡһоҙ ҡала яҙҙым!” – тип уйланы ала ҡарға.

Асыҡ йөҙлө матур Лилиәгә башҡаса яҡын барырға ҡурҡты. “Иң һәйбәте, ҡыҙҙың аяғын тешләргә сыртанға ҡушыу, – тигән фекергә килде. – Ҡыҙ һыу ингәндә һаҡ ҡына яҡынлашыр ҙа, ҡаптырып та алыр. Һыу аҫтында булғас, ҡыҙ уның килгәнен һиҙмәй ҙә ҡалыр”.

Суртан Файзрахман ала ҡарға Ғилмenисаны иғтибар менән тыңланы.

– Шулай итеп, ҡыҙыҡай мине ҡойроҡһоҙ ҡалдыра яҙҙы, уның аяғын суҡыйым тип ошо көнгә төштөм бит, – тип тамамланы ул һүҙен.

– Ҡайғырма, Ғилмениса, иптәш-теләктәш, – тине суртан, теге саҡ бүре менән килешкәнен хәтерләп. – Уның аяғын тешләйәсәктәр. Мин хәстәрен күрҙем инде. Бик ҡурҡыныс януарға әйттем. Мине лә рәнйеткәйне бит ул ҡыҙ.

Быны ишетеп, ала ҡарға һөйөнөсөнән тиҙ генә урманға осто. Бүрегә:

– Йән дуҫ, Хәйретдин. Минең суҡыуҙың кәрәге ҡалманы. Асыҡ йөҙлө матур Лилиәнең аяғын бик ҡурҡыныс януар тешләйәсәк, – тине. – Әйтелгән.

Суртандың был хаҡта нәҡ бүре менән һөйләшкәнен, бик ҡурҡыныс януар тип бүрене иҫкә алғанын ала ҡарға белмәй ине шул.

Эштең айышына төшөнмәгән бүренең дә күңеле булды. “Әйтелгән, тимәк, эшләнәсәк”. Ул, үҙ сиратында, Ҡарабәрҙегә һыу эсергә килгәс, суртанға өндәште:

– Яҡын әшнә, Файзрахман! Асыҡ йөҙлө матур Лилиәнең аяғын бик ҡурҡыныс януар тешләйәсәк. Әйтелгән, – тине суртандың был хаҡта ала ҡарғаға үҙен, йәғни бүрене иҫкә алып әйткәнен белмәйенсә.

– Ярар, – тип яуап ҡайтарҙы суртан. – Бик мәслихәт. Һин тешләргә генә тимәгән инде. Башҡа ҡурҡыныс януар тешләһә лә һәйбәт.

“Бүре һәм ала ҡарға башҡа берәй уҫал януар менән һөйләшеп ҡуйғандарҙыр”, тип уйланы. Бик алыҫтан Бүләк урманын күрергә килгән буйлы-буйлы шыма йөнлө ерән юлбарыҫ күҙ алдына баҫты. Уны ҡунаҡҡа саҡырмаҡсы ла булғайны, кәүҙәгә артыҡ ҙур, балыкты күп ашар, туйҙырып булмаҫ, тип уйынан кире ҡайтты.

Шулай итеп, кем әйтмешләй, ҡулса ябылды, суртан, бүре, ала ҡарғаның яуыз ниәте ҡулса эсенә бикләнде, ә асыҡ йөҙлө матур Лилиә ҡулсаның ситендә ҡалды.

***

Ҡойроғо китек ала ҡарға Ғилмениса тирәк башынан осоп китте. Йылғаға килеп, һөйөнәһөйөнә, суртан Файзрахманға асыҡ йөҙлө матур Лилиәнең иҙән йыуғанда илағанын һөйләне. “Теге бик ҡурҡыныс януар уның аяғын тешләгән, шуға күҙ йәштәрен ҡоя ул”, – тине. Шунан, урманға барып, был хәбәрҙе бүре Хәйретдингә еткерҙе. Шулай итеп, быларҙың өсөһөнөң дә күңеле булды. Асыҡ йөҙлө матур Лилиәнең аяғын бик ҡурҡыныс януар тешләгәненә ышанып, тынысландылар. Ҡыҙ шишмә һыуына килгән һайын, суртан уға ҡарап: “Теге саҡ мине ас ҡалдырғайның, шул кәрәк һиңә, кәрәгеңде алдыңмы!” – тип үҙ алдына һөйләнде. Урманда еләк йыйып йөрөһә, ҡыуаҡ эсендәге бүре: “Һинең арҡала ҡурҡаҡ ҡуян исемен күтәрҙем, үҙеңә лә эләктеме?!” – тип кинәнә-кинәнә уйланы. Ала ҡарға ауыл өҫтәренән осоп үткән саҡтарында: “Минең ҡойроҡ осом өҙөлһә, һинең аяғыңды тешләп ауырттырҙылар”, – тип һөйөндө.

Ә ысынында иһә асыҡ йөҙлө матур Лилиә суртан Файзрахман, бүре Хәйретдин һәм ала ҡарға Ғилмениסаның ниндәй мажараға тарыуын бөтөнләй белмәй ҙә, был хаҡта уның төшөнә лә инмәй ине, тирләп-бешеп болдор иҙәнен йыуғанда битенән күҙ йәштәрен түгел, ә маңлайынан тамған тирен һөртөп алғайны ул.



# ИЛ ИЖАДЫ – АҪЫЛТАШ



## Әҙ-мәҙ бәйләнештәр

Был яҡтарға килгәндәре булмаһа ла, малайҙар урманға йөрөмәгән кешеләр түгел ине. Шуға ла улар эшкә бик йәпләп тотондо. Береһе ҡоро утын йыйырға кереште, икенсеһе таған әтмәләй башланы. Гөлнур иһә биштәрҙәрҙе асып, әлегә кәрәк буласаҡ ризыҡты барланы.

– Сәй ҡайнап сыҡҡансы, Айнур, берәй тау башына менеп, телефон бәйләнеше эҙләп ҡарайһыңмы әллә? – тип бик тә эшлекле тәҡдим индерҙе ул малайҙарға. – Бейегерәк ерҙән ауылға сығып булмаҫ микән...

– Хәҙер, була ул! – быҡдай сетерекле хәлгә юл башында уҡ юлығыуҙарына үҙен ғәйепле һанаған малай, буласаҡ усаҡ янына бер ҡосаҡ ҡоро-һары килтереп ташланы ла, яҡындағы түбәгә ыңғайланы. Сәй ҡайнап сығып, ашъяулыҡ йәйеп ҡуйылыуға, ул елдереп кире килеп тә төштө.

– Булды ғына, малайҙар! – тип һөрәнләне ул, Гөлнур тотторған тимер көрөшкәнән ҡайнар һәм тәмле сәйҙе ҡабаланып һемерә-һемерә. – Атайым менән һөйләшә алдым. Ысынлап та, юлдан тайпылғанбыҙ икән. Тик бынан да сығып була. Ана-а ул – Ҡараташ, – Айнур дуҫтарының иғтибарын эреле-ваҡлы түбәләрҙән бер ниһе менән дә айырылмаған тауға йүнәлтте. – Юлһыҙ-ниһеҙ урман йырырбыҙ, әллә ни йыраҡ түгел дәһә.

– Ошонда алға план ҡорабыҙ, тигәйнек тәһә, – Илнур ҙа һүҙгә ҡушылды. – Юлһыҙ ерҙән һуҡмаҡ һалырға булғас, нимә тип беҙ Ҡараташҡа китеп барайыҡ әле? Ул тау бына әле беҙ ултырған тауҙан шәберәкме ни?

– Сәйәхәтебеҙҙең килешелгән планы бар ҙаһа! – Гөлнур ҙа һүҙен ҡыҫтырырға ашыҡты. – Ҡалай килеп сыға – шулай булыр, тип баш һуҡҡан яҡҡа тәгәрәргә беҙ ҡамғаҡмы ни?

– Ярай, малайҙар, – Айнур мәктәптә ҡыҙҙар араһында хәбәр һөйләгәндә лә малайҙар тип өндәшеп өйрәнгән. – Бер яңылыштыҡ, башҡаса аҡыллыраҡ, иғтибарлыраҡ булырбыҙ. Китәйек әле атайым әйткән яҡҡа, барайыҡ Ҡараташҡа. Бәлки, беҙ Ҡараташҡа табан яңы юл һалыусылар булырбыҙ. Киттек! – тине лә Айнур, әйберҙәрҙе йыйыштыра башланы.

**(Өмәнең дауамы. Шарты журналдың 4-се һанында донъя күрҙе)**

* * *

Һеҙҙең урманда юлһыҙ ерҙәрҙән йөрөгәнегеҙ бармы? Таҡыр һуҡмаҡтан саҡ ҡына ситкә китеүең була, киноларҙа ғына күрһәтелгән джунглиға керәһең дә китәһең. Кеше буйы булып, сырмалып үҫкән ҡуйы үлән, ваҡ әрәмә, аҙым һайын тиерлек арҡыс-торҡос йығылған ағас олондары – ана шул ул Урал урманы. Әйләнә-тирәңдә стена булып баҫҡан ағастарҙан башҡа бер ни ҙә күренмәй. Ана шул ваҡытта дөрөҫ йүнәлеште табып ҡара һин. Шуға малайҙар баштан уҡ йүнәлеште компас буйынса билдәләп алып, шуға ҡарап ҡына атларға килеште.

– Йыраҡ түгел, ошо битләүҙе төшөргә лә, тегеһенә менә башларға, – тип арауыкты ла самаланы Илнур.

– Үҙәк эсендә йылға барҙыр, картала күрһәтелмәгәнме икән? – тип география дәресен иҫкә төшөрҙө Гөлнур.

– Исеме лә яҙылмаған бер зәңгәр һыҙыҡ бар, шул йылғалыр, – тине Айнур. – Ур-ра, уның исеме булмағас, үҙебеҙ исемен дә бирәбеҙ, тамға ла һалып китербеҙ. Исем уйлай башлағыҙ!

Бер аҙ шым ғына атланылар. Әрекмән һәм ҡаҙаяҡтар бында ысынлап та кеше буйы ине. Үтә ҡартайған уҫаҡлыҡ эсенән баралар буғай, әллә ҡырғын булып дауыл үткәнме бынан – аяҡ баҫырлыҡ та урын юҡ, серек олондар түшәлеп ята. Шулай ҙа, күп тә үтмәне, алда һыу шаулауы ишетелде.

– Бына һиңә – мәгеҙ! – тип артҡа иптәштәренә табан әйләнде алдан барған Айнур. – Шишмә түгел, дарья бит был! Нисек аша сығырға бынан?

Ысынлап та, балалар ярына килеп баҫҡан шишмә осмото әллә үрҙә яуған ямғырҙан, әллә тауҙарҙа һуңлап ирегән ҡарҙан шау-гөр килеп, ҙур ташҡындай шәп урғылып аға ине. Тау йылғаларының холҡо шулайыраҡ инде. Йәйен ҡороп та ҡуялыр әле ул, ә бына хәҙер аша сығып ҡара.

– Мәсьәлә... – тигән һығымта яһаны хатта ауыр биштәрен алып ҡуйырға ла оноткан Илнур.

– Мажара тиген, – тип уны ҡеүәтләне Айнур. – Беҙ бит мажара эҙләп сығып kitttек, бына һеҙгә тәүге ҡаршылыҡ.

– Тәүгеһе уның баяғы аҙашып китеү булды, быныһы икенсеһе инде, – тип дөрөҫләп ҡуйған булды Гөлнур, үҙе берәй тәбиғи “күпер” эҙләп, тирә-яҡты байҡаны. Аша йығылған ағас олоно булмаһа, ярҙағы берәй ағасты тумырырға тура киләсәк инде. – Ауыр әйберҙәребеҙ булмаһа, тарыраҡ ер табып, йүгереп килеп һикер ҙә сыҡ та бит...

– Ә ниңә, бик шәп идея был! – тип ҡыуанып китте Илнур. – Тик ныҡ һәм төҙ таяҡ ҡына кәрәк! Аңланығыҙмы?

Бер аҙҙан шыма итеп әрселгән оҙон ғына сауҡаны тотҡан Илнур биштәрен теге ярға ташланы ла, Елена Исәнбаеваға оҡшатып, таяғына таянып ҡына шишмәнең теге яғына һикерҙе. Әйтерһең, гел шулай күнекмә эшләп йөрөгән.

– Мә, тот, – тип ул таяҡтың нәҙек осон һыу аша Айнурға һондо. – Күперең дә кәрәкмәй, күрҙеш, – тип маҡтанып алырға ла онотманы. Сират Гөлнурға етте. Уныһы башта тигеҙ ерҙә таяҡҡа таянып һикереп, күнекмә яһап алырға ла онотманы. Яйһыҙ килеп сыҡты, әлбиттә. Ә һыу аша ул тағы ла яйһыҙыраҡ ырғыны. Дөрөҫөрәге – ырғый алманы, “шап” итеп шишмәнең нәҡ уртаһына килде лә төштө. Таяғы ағып китте. Хәҙер үҙенә таяҡ кәрәк буласағын аңлаған Айнур уны тоторға йүгерҙе, ә Илнур тиҙерәк һыуҙан сығырға кәрәклеген дә онотоп, тубыҡтан һалҡын һыуҙа торған Гөлнур янында сәбәләнде. Ярай ҙа, ултыра төшмәне һәм йығылып та китмәне ҡыҙыҡай, тик күҙҙәрен ҡапланы ла, шишмә уртаһында ҡатты ла ҡалды. Аптыраған Илнурға үҙенә лә шаптырлатып һыуға инергә һәм ҡыҙыҡайҙы һөйрәп сығарырға тура килде.

Бер аҙҙан балалар көлөшә-көлөшә ярҙа яғылған усаҡ алдында аяҡ кейемдәрен киптерә ине.

– Һыу тубыҡтан да юҡ бит, нимә тип тиҙ генә сығып китмәнең? – тип хахылдай яланаяҡ бер ағас киҫәгендә баҫып торған Илнур.

– Үҙеңде бел әле! Төшөр булғас, алдан итегеңде һалһаң ни була? – тип уны яҡларға маташа үҙе көлөүҙән туктай алмаған Айнур.

– Көлкө һеҙгә, – тип үҙе лә көлөүҙән туктай алмай Гөлнур. – Боҙ кеүек бит һыу. Ә йығылып китһәм шунда?

– Мажаралар дауам итә! – тигән һығымта яһаны башлыҡ икәнен онотмаған Айнур. – Әйҙәгеҙ, алға – яңы мажараларға!



**(Дауамы бар.)**




12 йәш. Яратҡан йырсыларым – Максим, “Ранетки”, Радик Юльяҡшин, МС Баш. 11-15 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.
**Шакирова Алина.**
**453526, Белорет районы, Исмаҡай ауылы, Совет урамы, 34.**

12 йәш. Айгөл – Балыҡ, Миләүшә – Ҡыҫала. Буш ваҡытта китап уҡыйбыҙ. 11-13 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәбеҙ.
**Зиниәтуллина Айгөл, Хафизова Миләүшә.**
**452563, Мәсетле районы, Әбдрәхим ауылы.**

1998 йылдың 8 ғинуарында тыуғанмын. Тиҫтерҙәрем хат яҙһа ине.
**Шәмиғолов Инсаф.**
**453580, Бөрйән районы, Иҫке Мөсәт ауылы, Саҡмағош урамы, 55.**

14 йәш, Игеҙәктәр. Музыка тыңларға, волейбол, футбол уйнарға яратам. Кумирым – хоккейсы Александр Радулов. 14-16 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат һәм смс-хәбәр көтәм.
**Исхаҡова Рәмилә.**
**453392, Ейәнсура районы, Байыш ауылы, Йәштәр урамы, 8. Т.: 89373356800.**
**ICQ: 606501743.**

12 йәш. Уҡсы. Буш ваҡытта китап уҡырға яратам. 11-14 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хаттар көтөп ҡалам.
**Ғәбитова Таңсулпан.**
**453679, Баймаҡ районы, Ҡыуат ауылы, Күгәрсен урамы, 1.**

13 йәш. Ҡыҙ. 13-17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәр менән танышырға теләйем.
**Яматова Лилиә.**
**453365, Көйөргәҙе районы, Якут ауылы, Мәсәғут урамы, 52. Т.: 89625286198.**

14 йәш. 14-17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәр менән аралашҡым килә.
**Сәлимгәрәева Венера.**
**452892, Асҡын районы, Ҡашка ауылы, Тау урамы, 32.**

13 йәш. Ҡуҙы. Шөғөлдәрем: йыр-бейеү, шиғыр яҙыу. Ауыл мәҙәниәт йортонда үткәрелгән төрлө концерттарҙа сығыш яһарға яратам. 13-16 йәшлек егеттәр хат яҙһын ине.
**Имаева Гүзәл.**
**453039, Архангел районы, Аҙау ауылы, Совет урамы, 33.**

12 йәш, Ҡыҙ. Яратҡан шөғөләм – бейеү һәм спорт. 12-14 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.
**Бурһыҡбаева Рүзилә.**
**453663, Баймаҡ районы, Темәс ауылы, Интернат урамы, 9.**
**Т.: 89649647734.**

13 йәш. 13-15 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йәки шылтыратыу көтәм.
**Әбүбәкирова Нурзилә.**
**453809, Хәйбулла районы, Әбүбәкер ауылы, М. Ғафури урамы, 11.**
**Т.: 89279407717.**

15 йәш. Ылаҡ. Йырсыларҙан Радик Юльяҡшин, Анжелика, Arash оҡшай. 13-16 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.
**Мөхәмәтйәнова Гүзәлиә.**
**453343, Күгәрсен районы, Санъяп ауылы, Тау урамы, 17.**

Сөмбөлгә – 13 (Үлсәү), Гөлдәргә 13 йәш (Ҡыҙ). Бәйләргә, һүрәт төшөрөргә яратабыҙ. Спорт төрҙәренән волейбол һәм баскетбол оҡшай. Йәштәш егеттәрҙән хат һәм фото көтәбеҙ.
**Ғималова Сөмбөл, Буләкәнова Гөлдәр.**
**453625, Әбйәлил районы, Әбделғәзе ауылы, Ленин урамы,1, Ленин урамы,30.**

10 йәш. 10-11 йәшлек тиҫтерҙәрҙән хат көтәм.
**Әхмәтйәнова Алһыу.**
**453061, Ғафури районы, Еҙем-Ҡаран ауылы, Баҙар урамы, 8.**

14 йәш. Үлсәү. Йырсыларҙан МС Баш, Радик Юльяҡшин оҡшай. 14-16 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йәки смс-хәбәр көтөп ҡалам.
**Зәһиҙуллина Луиза.**
**453560, Белорет районы, Уҫманғәле ауылы.**
**Т.: 89373537921.**

13 йәш. Буш ваҡытты китап уҡып, саф һауала йөрөп үткәрәм. 10-14 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.
**Хәкимова Алина.**
**453680, Бөрйән районы,Яңы Усман ауылы, Генерал Кусимов урамы, 5.**

13 йәш. Һыуғояр. Шөғөлдәрем тураһында хатта яҙырмын. 13-15 ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтөп ҡалам.
**Әхмәтханова Илүзә.**
**452563, Мәсетле районы, Әбдрәхим ауылы,Октябрь урамы, 1.**

# Ғафури районы





Район Көньяҡ Уралда урынлашҡан, Башҡортостандың географик үҙәге һанала. Исеме ошо райондың Еҙем-Ҡаран ауылында тыуып үҫкән Башҡортостандың беренсе халыҡ шағиры Мәжит Ғафури хөрмәтенә бирелгән. Үҙәге – Красноусольск ҡасабаһы. Районда 97 ауылда 36 мең кеше йәшәй.

Гербтың үҙәгендә көмөш фондағы зәңгәр түңәрәк уртаһында көмөш төҫтә бирелгән башҡорттоң Табын, Кесе һәм Кәлсер ырыуҙары тамғаларынан хасил билдәнән зәңгәр һыу фонтаны бәреп тора. Был райондың шифалы һыуҙарға байлығын күрһәтә. Зәңгәр түңәрәк – Ғафури районының һәм Башҡортостандың тәбиғи ҡомартҡыһы булған Аккүлде һыҙатландыра. Был төбәктең урмандарға байлығын ике яҡлап милли биҙәк – алтын ҡуҫҡар рәүешендә төшөрөлгән йәшел һыҙаттар күрһәтә, ә ҡуҫҡар – был-тирәлә борондан үҫешкән малсылыҡ символы ла. Гербтың дөйөм фонының көмөш булыуы ихласлыҡ, асыҡлыҡ билдәһе. Йәшел төҫ – муллыҡ, тыныслыҡ төҫө.



Флаг гербты сағылдырған дүрткел туҡыманан ғибәрәт.

2006 йылда ҡабул ителгән.

Авторы Салауат Ғиләжетдинов.



# Халыҡ иҫәбен алыу ни өсөн кәрәк?



Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу халыҡ һанын белеүҙең төп сығанағы һанала. Был сара халыҡтың милли һәм тел составы, уның белем кимәле һәм социаль-иҡтисад характеристикаһы тураһында мәғлүмәттәр алырға ярҙам итә. Ундай мәғлүмәттәр дәүләткә илдең артабанғы иҡтисад һәм социаль үҫеше өсөн план һәм программалар төҙөгәндә кәрәк. Иҫәп алыу төбәктәр өсөн дә мөһим, сөнки шуға ҡарап төрлө пособиелар, социаль проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн бюджеттан аҡса бүленә. Шулай уҡ иҫәп алыуҙа беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ ҡатнашырға бурыслы, үҙебеҙ хаҡында мәғлүмәт биреп, беҙ ҡараған төркемгә ҡағылған перспектив социаль программаһының ҡабул ителеүенә булышлыҡ итәбеҙ. Иҫәп алыу мәғлүмәттәре уникаль һанала, уларҙы былай һанап йәки административ сығанаҡтар аша ғына алыу мөмкин түгел.




Мәғлүм булыуынса, һуңғы бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу 2002 йылда үтте. Иҫәп алыу илдә демографик хәлдең киҫкен тороуын күрһәтте һәм был өлкәлә дәүләт сәйәсәтенә үҙгәрештәр индереп, тыуым артыуҙы күтәреүгә йүнәлтелгән программалар ҡабул итеүгә булышлыҡ итте. Һуңғы йылдарҙағы бөтә төп иҡтисад документтарын әҙерләгәндә лә ошо иҫәп алыу һөҙөмтәләре ҡулланылды.

2010 йылда үтәсәк иҫәп алыу һуңғы ун йыл эсендә эшләнгән эштәрҙең һәм милли проекттарҙың ыңғай һөҙөмтәләрен баһаларға мөмкинлек бирәсәк. Алынған мәғлүмәттәр аша донъя иҡтисад көрсөгөнөң илгә, халыҡтың йәшәү кимәленә нисек тәьҫир итеүе лә асыҡ күренәсәк. Статистик күрһәткестәр нигеҙендә, мәҫәлән, халыҡтың мәшғүллеге буйынса ла хәбәрҙар буласаҡбыҙ, сөнки бөгөн бер юлы ике-өс урында эшләгән кешеләр барлығы билдәле. Тотош блок һорауҙар торлаҡ өлкәһендә, белем биреүгә ҡағылышлы хәл-ваҡиғаларҙағы үҙгәрештәрҙе лә күрергә ярҙам итәсәк.

Ҡыҫҡаһы, һәр иҫәп алыуҙың мәҙәни-тарихи яҡтан әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Иҫәп алыуҙар арҡаһында, үҫеп килеүсе быуын беҙҙең, рәсәйлеләрҙең, XXI быуат башында нисек йәшәүен беләсәк.

***

Рәсәй империяһының тәүге дөйөм иҫәп алыу мәғлүмәттәре буйынса 1897 йылда Башҡортостанда 1991,4 мең кеше йәшәгән. 2002 йылғы иҫәп алыу буйынса республика халҡының һаны 4104, 3 меңгә еткән. Әлбиттә, халыҡ һаны ғына түгел, уның составы ла үҙгәргән. XX быуатта Рәсәйҙә урбанизацияның ныҡ үҫеүе күҙәтелгән. Әгәр 1897 йылда Башҡортостанда 4 кенә ҡала булып, унда 79 мең кеше йәшәһә, 1970 йылдарҙа ҡала халҡы ауыл халҡына ҡарағанда артып киткән. 2002 йылғы иҫәп алыуҙан ҡала халҡының республикала 64 процент тәшкил итеүе билдәле.

Үткән быуат эсендә халыҡтың йәш составы ла ныҡ үҙгәргән. Тотош Рәсәйҙәге кеүек, Башҡортостан халҡы ла “картая”. Әлеге ваҡытта пенсия йәшенән өлкән булғандарҙың һаны балалар менән үҫмерҙәрҙекенә ҡарағанда күберәк.

**Н. ӘХТӘМОВА әҙерләне.**



# КРОССВОРД

**Һулдан уңға:** 1. Һыу ҡошо. 6. Ағыулы һөрөм (химик формула). 7. Эт исеме. 8. Күңел тыныслығы. 10. Аяғы зәғиф. 11. Ҡуҙаҡлы орлоҡ. 13. Бирешмәй торған. 16. Нота. 19. Турғай төрө. 21. Урман ҡошо. 23. Әсетке. 24. Төҫ. 27. Сыра. 29. Полк (бор.). 30. Матди ярҙам. 34. Тәлмәрйен төрө. 36. Ғәскәри берәмек. 37. Балыҡтарҙың һулау ағзаһы. 40. Риүәйәткә ингән ике ҡоштоң береһе. 42. Матдә. 44. Ғәрәп алфавитының беренсе хәрефе. 45. Ҙур ағас йәшник. 46. 16 кг. 48. Үрсетмә үҫентеләр йыйылмаһы. 49. Малға һалынған тамға. 50. Аяҡтың өлөшө. 51. Илдең етештереү тармағы. 53. Нәҙек бау. 55. Иген төрө. 57. Ҡарауыл. 58. Һыу себене. 60. Туҙып бөткән. 62. Ҡарсығалар ғаиләһенә ҡараған ҡош.




**Өҫтән аҫҡа:** 1. Йылға балығы. 2. Нескә һуйыл. 3. Йырсы Ишбаевтың исеме. 4. Тамағы туймаған. 5. Өс йәшлек ат. 9. Аҫылташ, сердолик. 10. Кешене хайуандан айырған сифат. 11. Кешелә сир тыуыуҙырыусы селәүсен. 12. Һулдан уңға 40-тың һыңары. 14. Киптерелгән еләк. 15. Дала төлкөһө. 16. Үтеп сыҡҡыһыҙ урман-таулы ер. 17. ... янына ҡуш. 18. Грекатарҙа ҡояш. 20. Рәсәйҙәге интернет тамғаһы. 22. Үтә һирәк осрай торған ҡиммәтле нәмә. 25. Сыбар төҫтә. 26. Башҡортостандың төньяғындағы йылға. 28. Урманды бар итеүсе. 31. Дини ғәмәл. 32. Башҡортостандағы йылға. 33. Ат төҫө. 34. Балаларҙы ҡурҡытыусы зат. 35. Төҫ. 38. Яу. 39. Инглиз лорды ҡатыны. 41. Артыш ҡыуағының икенсе исеме. 43. Һыу буйы ҡыуағы. 45. Алла Пугачева йырындағы король. 46. Латинса ул ике тигәнде аңлата. 47. Тирмәндә тартылған иген. 52. 1, 3, 5 – ниндәй һандар? 53. Учалыла табылған металл. 54. Балыҡ тотоу ҡоралы. 56. Саҡ ҡына сыҡҡан тауышты аңлата. 57. Сабыйҙар ризығы. 59. Биҙәк. 61. Күк есеме.

# Көләмәстәр

**Рөстәм урамға йыйына, резина итек кейеп ала.**

**– Рөстәм, урамда ҡоп-ҡоро, бер күләүек тә юҡ, – ти әсәһе.**

**– Ә мин барыбер табам! – ти Рөстәм эре генә.**

* * *

Һарысай (блондинка) тик кенә торған атты күреп ҡала... Йүгереп бара ла, менеп тә ултыра. Ә ат көтмәгәндә сабып сығып китә. Яйһыҙ ултырған һарысай йығылып төшә, ләкин оҙон һәм ҡуйы сәстәре менән уралып, аҫылынып ҡала. Үлемен ошонда ғына табыр ине лә һарысай, ләкин уны күреп ҡалалар һәм каруселде туҡтаталар!

* * *

**Компьютерсы тәҙрә янында тора. Тәҙрәне аса ла яба, аса ла яба. Янына икенсеһе килә лә, һорай:**

**– Ни эшләйһең һин?**

**– Ғәжәп хәлдәр: бына, тәҙрә – асып була, ябып була, ә йыйып ҡуйып булмай!...**

* * *

– Вегетарианецтарҙы мин ни өсөн күрә алмайым, беләһеңме?

– Ә ниңә?

– Улар минең ризыҡтың ризығын ашайҙар!

* * *

**Беҙҙә йыл миҙгелдәре өсәүгә бүленә:**
**“Тәҙрәне асмағыҙ, былай ҙа эҫе!”**
**“Тәҙрәне асмағыҙ, былай ҙа һыуыҡ!”**
**“Тәҙрәне асмағыҙ, былай ҙа яҡшы”.**

* * *

Үҫмер йөрөгән ҡыҙына бүләк һайлай:

– Ҡабына, зинһар, “Әлиәгә – Айҙарҙан” тип яҙып бирегеҙ әле.

Һатыусы:

– Бәлки, кәрәкмәҫ? Мин ”Айҙарҙан” тип кенә яҙыр инем, доньъя хәлен белеп буламы...

* * *

– Хәлегеҙ нисек? – тип һорай табип.

– Яҡшыра башланы, доктор. Дарыуығыҙ ярҙам итте, ахыры. Уның тышында яҙылған инструкцияны теүәл үтәнем мин.

– Ә ни тип яҙылған һуң унда?

– “Ныҡ ябып һаҡларға” тиелгән.

**Тышлыҡта – “Аманат”тың “Яҙыл да, бүләк от!” уйынының төп призеры – велосипед отоусы Амур Моратшин.**


# АМАНАТ ©

**Республика балалар-үҫмерҙәр журналы**

**Республиканский детско-юношеский журнал**

**№ 06 (799), Июнь, 2010**

Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһының «Аманат» журналы редакцияһы ҡаҙна предприятиеһы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ.

Учредители: Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала «Аманат» и Управление по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве Республики Башкортостан.

**Баш мөхәррире – Сәлмән ЯРМУЛЛИН**

Мөхәрририят:

Артур СУРИН, Салауат СӘҒИТОВ, Артур ИҘЕЛБАЕВ, Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ (яуаплы сәркәтип), Нурия ӘХТӘМОВА (бүлек мөхәррире), Артур ТАПАҠОВ (биҙәлеш мөхәррире).

1929 йылдың мартынан нәшер ителә.
Айына бер тапҡыр башҡорт телендә сыға.
Урта һәм оло йәштәге мәктәп балалары өсөн.
Издается с марта 1929 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.
Для детей среднего и старшего школьного возраста.

Киң коммуникациялар, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау даирәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2007 йылдың 21 декабрендә теркәлде.

Журналды теркәү тураһында таныҡлыҡ ПИ № ФС77-30612

Зарегистрирован Федеральной службой по надзору в сфере массовых коммуникаций, связи и охраны культурного наследия 21 декабря 2007 года.

Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-30612



БЕҘҘЕҢ АДРЕС:

450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2. «Аманат» журналы редакцияһы.

450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала «Аманат».

ТЕЛЕФОНДАР:

баш мөхәррир – 277-73-46; яуаплы сәркәтип – 223-91-83;
бүлектәр – 277-74-80.
e-mail: amanat@yandex.ru
Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru



РЕКВИЗИТТАР:

г. Уфа, ИНН 02 78 02 12 11, КП РБ Редакция журнала “АМАНАТ”
р/с 40602810700000000017, в филиале ОАО “УралСиб”,
к/с 30101810600000000770 БИК 048 073 770

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.

Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.

Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».

Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2.



Редакция һеҙҙән килгән хаттарҙы иғтибар менән ҡарай, яҙышып тороуығыҙ өсөн шатлана. Әммә һәр берегеҙгә яуап бирә алмай. Беҙҙең материалдарҙы файҙаланғанда «Аманат» журналына һылтаныу мотлаҡ.



Баҫырға ҡул ҡуйылды 04.06.2010. Ҡағыҙ форматы 84х108 $^{1}/_{16}$ Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 2,25 баҫма табаҡ, 6,05 иҫәп-нәшриәт табағы. Тиражы 16902. Һатыуҙа – хаҡы ирекле. Заказ № 2.0068.10

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

# Беҙҙең вернисаж

## Минең республикам!

**Ҡәҙерле дуҫтар! Республика йылына арналған конкурсыбыҙ дауам итә.**

**Ҡылҡәләм тирбәтеүселәрҙән конкурсҡа килгән һүрәттәрҙең сираттағы төркөмөн һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

















1. **“Минең олатайым”. Зимфира ФӘЙЗУЛЛИНА.** Әбйәлил районы, Яңы Балапан ауылы.

2. **“Умарталыҡ”. Лилиә ӘЙҮПОВА.** Ҡариҙел районы, Яңы Бәрҙәш ауылы.

3. **“Толпарым”. Салауат АМАНҒОЛОВ.** Баймаҡ районы, Үрге Иҙрис мәктәбе.

4. **“Шишмә”. Азамат МӨХӘМӘТҠУЖИН.** Баймаҡ районы, Үрге Иҙрис ауылы.

5. **“Баҫыуҙа”. Булат ВӘЛИЕВ.** Борай районы, Бигәнәй ауылы.

6. **“Ғорур имән”. Айгөл КӘРИМОВА.** Ҡариҙел районы, Яңы Бәрҙәш ауылы.

7. **“Туғайҙа”. Иҙел ФӘЙЗУЛЛИН.** Баймаҡ районы, Үрге Иҙрис ауылы.

8. **“Минең тыуған яғым”. Зилиә КАШАПОВА.** Илеш районы, Үрге Йәркәй ауылы.

# Кул һелтәгеҙ көрсөккә, яҙылығыҙ «Йәшлек»кә!


Эльвира Хисаева, топ-модель

## Кәҙерле дуҫтар!

«Йәшлек» гәзитенә яҙылыу хаҡы кәмене һәм ул йәйҙән яңыса, «ҡалынайып», аҙнаһына ике тапҡыр – шишәмбелә **8 битлек**, ә шәмбелә **16 битлек** булып сығасаҡ.

**«Йәшлек»кә хәҙер ике индекс буйынса яҙылырға була: ул өйөгөҙгә аҙнаһына ике тапҡыр – *ШИШӘМБЕ* һәм *ШӘМБЕ* көндәрендә килһен тиһәгеҙ – 80148 индексы (ярты йылға яҙылыу хаҡы – 337 һум 86 тин), *ШӘМБЕ* һанын ғына алдырып уҡырға теләһәгеҙ (ярты йылға яҙылыу хаҡы – 278 һум 10 тин), 16414 индексы буйынса яҙыла алаһығыҙ.**

(Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: тәүге ярты йыллыҡҡа яҙылыу хаҡы 352 һум 80 тин тәшкил иткәйне.)

*Хөрмәтле милләттәштәр, зарланмағыҙ көрсөккә – яҙылығыҙ «Йәшлек»кә!*

**Бергә булдыҡ, бергә ҡалайыҡ!**

Ал да нур сәс халҡыңа!

**Йәшлек**

Башҡортостан йәштәре гәзите

Беҙҙең адрес: 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 8-се ҡат. Беҙҙең сайт: www.ye02.ru Эл.адрес: ye@ye02.ru

Журналдың индексы – 73317